Гәзит
1935 йылдың
майынан сыға

Имен таң - көнгә ҡеүәт

# Таң

12+

20
октябрь
2023 йыл
йома
№ 42
(10646)

Сайт: tanrb.rbsmi.ru E-mail: tan_burz@mail.ru Тел.: 8-905-35-444-95

Башҡортостан Республикаһы Бөрйән районы муниципаль районының ижтимағи-сәйәси гәзите

ЮБИЛЯРЫБЫҘ

## 95 йәшлек аҡһаҡал

...Ғәлиәкбәр ауылының талы-ташлы юлдары буйлап елдерәбеҙ. Тирә-яҡта инде ҡара көҙ – һары көҙҙөң һуңғы япраҡ-йәштәре тама.

Ғәлиәкбәргә 95 йәшен артмаклаған Исмәғил Ғәбәйҙулла улы Яманаевтың хәлен белешергә юлланыуыбыҙ. Тәбиғәттә әле көҙ булһа ла, “Таң” гәзитенең иң тоғро дуҫтарының ғына түгел, иң әүҙем авторҙарының береһе булған, 94 йәшендә лә үҙ ҡулдары менән мәкәлә яҙып ебәреп торған Исмәғил ағай беҙҙе яҙ ҡояшы һымаҡ балҡып ҡаршы алды. Әйткәндәй, уның тәүге мәкәләһе гәзиттә 1961 йылда баҫыла – тимәк, 60 йылдан ашыу ҡулынан ҡәләме төшмәй!

Тыуһан биште бирмәҫһең дә, шөкөр! Эшсән, хәрәкәтсән, күңеле матур, тормошто, кешеләрҙе яратҡан шиғри йәнле булыуы ла сәбәптәр быға. Зиһене салт, күңеле күтәренке дуҫыбыҙҙың. Беҙ барғанға ҡыуанып китте.

Исмәғил бабайҙың картлығы хәстәрлекле һәм бәхетле. Йылы өйҙә улы Рәфис менән көңгөр-ҡаңғыр итеп йәшәп ятмыштары. Ошо уҡ ауылда төпләнгән ҡыҙы Гөлдәр ҙә хәстәренән, иғтибарынан өҙмәй – килеп ярҙам итеп, ашарҙарына бешереп, донъяларын ҡарап, таҙартып тора, атаһының сәләмәтлеген ҡурсалай.

Ғүмеренең иң бәхетле йылдары хаҡында һорашҡас, Исмәғил бабайҙың нур сәскән йөҙө моңһоуланып китте, күҙ төбөндә мөрйендәй генә ике тамсы ла хасил булды...

-Ғүмеремдең иң бәхетле мәлдәре – әбейем менән бергә йәшәгән йылдарым. Зәйтүнәмдең вафатына 5 йыл була инде, - тип ауыр көрһөнеп ҡуйҙы.

Унан, тиҙ генә үҙен ҡулға алып:

-Эй-й, ҡунаҡтарға барып, гөрләшеп уйнап-көлөп, ауыл урамы буйлап, кеше аптыратып, йоҡлағандарҙы уятып, әбей менән ҡушарлап шаңғырата йырлай-йырлай ҡайтҡан саҡтар бер мәл генә булған икән шул. Шөкөр, балалар һәйбәт ҡарай, һүҙ юҡ.

Ҡартлығым ҡараулы. Ғинуар-февраль айҙарына, һыуыҡ мәлдәрҙә, Мәләүездәге Гөлсәсәк ҡыҙым алып ҡайтам тине, - тип өҫтәне.

Исмәғил бабай 1928 йылдың 25 октябрендә донъяға килә. Үҙ атаһын иҫләмәй тиерлек – 3 йәшендә генә атаһынан ҡала. Бәхетенә күрә, үгәй атаһы – Кәшәлә ауылынан



Ғәләүетдин атлы үҙаман уны үҙ улы кеүек күрә, хатта үҙ фамилияһын да бирә.

Исмәғил Ғәбәйҙулла улының күргән-кисергәндәре хаҡында уның мәкәләһе буйынса яҡшы беләләр гәзит уҡыусылар. Уның яҙмалары – тормош дәреслеге, аңлағандарға – фәһем, аңлап етмәгәндәргә – ишара... Малай ғына сағынан тормоштоң әсеһен-сәсәһен мул татыған Исмәғил тормош ҡаҙанында бешегеп, эшкә шәп, тырыш, ныҡышмал булып буй еткерә.

(Дауамы 3-сө биттә).

ЮЛ ХУЖАЛЫҒЫ ХЕҘМӘТКӘРҘӘРЕ КӨНӨНӘ ҠАРАТА

## Юлдарҙа эштәр тынмай

**Бөгөн Әбйәлил юл ремонт-төҙәлөш идаралығының Бөрйән районы участкаһындағы Руслан Денисламов етәкселек иткән коллективта 74 кеше эшләй. Бөрйән юлсылары төбәк, муниципаль-ара (246 саҡрымдан ашыу) һәм урындағы (224 саҡрымдан ашыу) автомобиль юлдарын хеҙмәтләндерә. Быларҙан тыш, 16 күпер, 447 торба, 16 тукталыш, 47 саҡрымдан ашыу барьер ҡоймалар кеүек һалма ҡоролмалар ҙа участка хеҙмәткәрҙәре ҡарамағында.**



Юлсыларҙың хеҙмәте барыһының да күҙ алдында: ҡайҙалыр асфальт һалына, йыл дауамында автомобиль юлдары грейдер ярҙамында тигеҙләнә. Ай һайын юл ситтәре, тукталыштар сүпсарҙан, ҡышын ҡарҙан таҙартыла, шулай уҡ юл билдәләре буяла.

Производство-техник бүлек начальнигы Айрат Баязитов биргән мәғлүмәттәр буйынса, быйыл 8903 метр барьер ҡоймалары, 9 автопавильон буялған. Юл билдәләрен һәм туристик йүнәлештәге билдәләр, йәйәүлеләр үткәүелдәренә билдәләр ҡуйыу, горизонталь разметкалар һыҙыу, сигнал тумбаларын урынлаштырыу һәм алмаштырыу, юлдарҙы боҙлауыҡҡа ҡаршы тоҙҙом ҡатнашмаһы менән эшкәртеү, автомобиль юлдарындағы 10 күперҙә буяу эштәре башҡарылған. Бөтә автомобиль юлдары ситтәрендәге үләндәрҙе сабыу, Иҫке Собханғол-Ҡағы, Иҫке Собханғол-Темәс,

(Дауамы 2-се биттә).

ИҒТИБАР!

### Өҫтәмә ял көнө

2023 йылдың ноябрендә өс көнлөк ял көтә.

Быйыл Халыҡтар берҙәмлеге көнө шәмбегә тура килә, шуға 4 (шәмбе), 5 (йәкшәмбе) һәм 6 (дүшәмбе) ноябрҙә эшләмәйбеҙ.

Ә йома, 3 ноябрҙә, эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡара.

### Ил өҫтөндә ниҙәр бар?

(12-19 октябрь)

**Демография**

Был ваҡыт эсендә районда 3 сабый тыуған, 1 яңы ғаилә барлыҡҡа килгән. Ике ғаилә никахын тарҡатҡан. 3 райондашыбыҙ донъя менән бәхилләшкән.

**01 хәбәр итә**

Яңы Монасип ауылында өйгә ут тоҡанған. Янғын һүндереүселәр барғанға тиклем ауылдағы ирекле янғын һүндереү командаһы утты һүндергән.

Әгәр ҙә ут сығыу осрағына шаһит булһағыҙ, 101, 112 номерҙары буйынса махсус хеҙмәттәргә хәбәр итергә ашығығыҙ.

**02 хәбәр итә**

Бер аҙна эсендә район буйынса енәйәттәр һәм хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында 38 мөрәжәғәт теркәлгән. Улар иҫәбендә үлтереү менән янау (3), янғын (1), ҡорал, хәрби припастар, шартлатҡыс матдәләр тартып алыу (1), кешегә тән йәрәхәттәре һалыу (2), зыян күреүселәр булмаған юл-транспорт ваҡиғаһы (1), административ хоҡуҡ боҙоуҙар (8), ғаилә низағы (2), шәхси документтар юғалтыу (3), атаәсәлек бурыстарын үтәмәү (1), хулиганлыҡ (1), ваҡ урлашыу (1) һәм башҡалар бар.

Йәмғиәт тәртибен һаҡлау нерядтары тарафынан 80 протокол төҙөлгән. Шул иҫәптән ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре тарафынан – 62. Ике водитель алкоголь ҡулланған килеш автомобиль менән идара итеп, юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙған.

**Һаулыҡ һаҡлау**

Районда үтеп барған аҙнала 1 кешелә коронавирус сире асыҡланған. 3 аҙна эсендә был сир менән йәмғеһе 4 ауырыу теркәлгән, барыһы ла Иҫке Собханғол ауылынан.

Киҫкен респираторлы-вируслы инфекция менән ауырыусылар һаны кәмеү өҫтөндә – үткән аҙнала 86 осраҡ теркәлһә, был аҙнала – 83. Күбеһенсә мәктәпкәсә йәштәге балалар ауырый, - тип хәбәр итә район үҙәк дауаханаһы табиптары.

podpiska-pochta.ru

**ВАТАН ҺАҒЫНДА**

## Көҙгө саҡырылыш башланды



Рәсәйҙә, шулай уҡ Башҡортостанда көҙгө хәрби хеҙмәткә саҡырыу кампанияһы бара. Ул 1 октябрҙә башланды һәм 31 декабргә тиклем дауам итәсәк.

Быйылғы көҙгө саҡырылышта Бөрйәндән 39 егет әрме сафын тулыландырасаҡ. Тәүге оҙатыу 24 октябрҙә була. Был көндә хәрби хеҙмәткә 6 егетте оҙатыу планлаштырыла.

Хеҙмәт итеү ваҡыты элеккесә – 12 ай. Хеҙмәткә саҡырылыусылар махсус хәрби операцияға йәлеп ителмәйәсәк.

Әлеге ваҡытта буласаҡ һалдаттар медицина тикшереүе үтә. Унда райондан 1996-2005 йылғы 236 егет саҡырылған.

**Г. ХАФИЗОВА.**

**АҘЫҠ-ТҮЛЕК СӘНӘҒӘТЕ ХЕҘМӘТКӘРҘӘРЕ КӨНӨНӘ ҠАРАТА**

# Сифатлы ризыҡ етештерәләр

Районыбыҙҙа аҙыҡ-түлек сәнәғәте ярайһы ғына үҫеш алған тармаҡтарҙың береһе. Иң мөһиме, иң оло ризыҡҡа – икмәккә ҡытлыҡ юҡ, бешереп өлгөртөп көнә торалар. Күңел йылыһы ҡушып бешергән ризыҡтар уңа, тиҙәр. "Бөрйән" ҡулланыусылар кооперативында бешерелгән ризыҡтар һәр ваҡыт тәмле була. Шуға ла был ашхананан иртәнән кискә тиклем кеше өҙөлмәй.

"Бөрйән" ҡулланыусылар кооперативы менән 2020 йылдан алып Шәмиғолова Айгөл Рәшит ҡыҙы (өҫтәге һүрәттә)етәкселек итә. Район халҡы белгән ашхананан тыш, кооперативта икмәк бешереү һәм ярымфабрикаттар етештереү цехтары, 3 магазин бар. Бөгөнгө көндә цехтарҙа 18 төр ярымфабрикат етештерелеп, магазиндарға һатыуға сығарыла. Итле ризыҡтар тик районыбыҙҙың фермерҙарынан, шәхси хужалыҡтарҙан алынған һыйыр итенән генә эшләнә.

Бында эшләүсе уңған ҡатын-ҡыҙҙар икмәк бешереү цехында көнөнә 450 таба, ә айына 415 тонна икмәк бешерә. Унан тыш, 30-ҙан ашыу төр ҡамыр ризыҡтары ла бешереп өлгөрәләр. Әйткәндәй, мәктәптәрҙә лә икмәк менән тап "Бөрйән" ҡулланыусылар кооперативы тәьмин итә.





"Кооперативта 32 хеҙмәткәр эшләй. Эш күп, кеше етешмәй. Әлеге көндә 2 цехха 2-шәр эшсе талап ителә. Эш хаҡы һәйбәт, 20-30 мең һумдан төшмәй, килем күп булһа, 35 меңгә лә етә. Эш смена менән - 1 аҙна эш, 1 аҙна ял. Эшкә килһәләр, уҡытып алыу мөмкинлеге бар беҙҙә. Уңған ҡатын-ҡыҙҙарҙы эшкә көтөп ҡалабыҙ", - ти Айгөл Рәшит ҡыҙы.

Ашхана көн һайын эшләп тора. Аҙна һайын юбилей, туйҙар шаулап үтә бында. Үҙҙәренең хаҡлы ялдағы хеҙмәткәрҙәрен дә онотмай улар – күптән түгел генә 30-ға яҡын хаҡлы ялдағы ветерандарына миҙалдар тапшырғандар, ололар көнөн матур итеп үткәргәндәр. Үҙебеҙҙә генә түгел, республика кимәлендә үткән сараларҙың да уртаһында ҡайнайҙар. Һәр ҡайҙа ла маҡтау һүҙҙәре ишетеп, юғары баһа алып ҡайта улар. Бихисап маҡтау ҡағыҙҙары, рәхмәт хаттары, дипломдар ошоға дәлил.

"Бөрйән" ҡулланыусылар кооперативы халыҡ өсөн эшләй, заман менән бергә атлай. Район халҡын эш менән тәьмин иткән ойошмаларҙың береһе булараҡ та ҙур әһәмиәткә эйә.

**А.УРАЗАЕВА.**

**КЕШЕ ҺӘМ ЗАКОН**

## Прокуратура граждандарҙы ҡабул итә

Бөрйән районы прокуратураһы түбәндәге мәсьәләләр буйынса граждандарҙы ҡабул итә:

19 октябрҙә - ғаиләлә граждандарҙың хоҡуҡтарын үтәү, көнкүрештә көс ҡулланыуҙы иҫкәртеү;

26 октябрҙә - һаулыҡ буйынса мөмкинлектәре сикләнгән граждандарҙың хоҡуҡтары һаҡланышы;

9 ноябрҙә - торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өлкәһендә граждандарҙың хоҡуҡтары һаҡланышы;

30 ноябрҙә - һаулыҡ буйынса мөмкинлектәре сикләнгән граждандарҙың хоҡуҡтары һаҡланышы.

"Ҡыҙыу линия" телефоны: 8(347) 55 3-52-08.

Үҙегеҙ менән паспорт йәки шәхесегеҙҙе раҫлаусы башҡа документ булыуы шарт.

Адрес: Иҫке Собханғол ауылы, Урал урамы, 1/1.

**А. ЁЛКИН, Бөрйән районы прокуроры, юстиция советнигы.**

**ЮЛ ХУЖАЛЫҒЫ ХЕҘМӘТКӘРҘӘРЕ КӨНӨНӘ ҠАРАТА**

# Юлдарҙа эштәр тынмай

(Дауамы. Башы 1-се биттә).

Иҫке Собханғол-Мораҡ, Аҫҡар юлдарында ҡыуаҡтарҙы ҡырҡыу эштәре теүәлләнгән. 1980 квадрат метр юлда соҡорҙарҙы эҫе асфальт бетон менән ремонтлау эштәре тамамланған.

Автомобилдәр хәрәкәтенең артыуы юл сифатына яңы талаптар ҡуя. Ҙур иғтибар талап иткән ҡырсынташлы юлдар ГОСТ һәм СНиП талаптарына яуап бирә. Юлсылар хеҙмәтләндергән автомобиль юлдарында юл торошона бәйле юл-транспорт ваҡиғалары теркәлмәгән.

Территориаль заказ буйынса төбәк һәм муниципаль-ара Иҫке Собханғол-Темәс, Иҫке Собханғол-Мораҡ, Әтек, Тимер, Әбделмәмбәт йүнәлештәрендә юлдарҙа эштәр башҡарылған, Ҡағы-Иҫке Собханғол юлының туҙған ҡатламы йүнәтелгән. Августа Иҫке Собханғол-Мораҡ автомобиль юлының 33-39-сы саҡрымы ремонтланған. Иҫке Собханғол - Темәс автомобиль юлының төрлө урындарында 5 саҡрым юл рәтләнеп, файҙаланыуға тапшырылған.

Урындағы Иҫке Собханғол – Ғәлиәкбәр, Нәби – Яңы Монасип, Мәксүт ауылдары юлдарында ла ремонт үткән.

Алда яуаплы һәм ҡатмарлы ҡыш осоро. Бөрйән участкаһының урам-юлдарҙы ҡарҙан таҙартыу өсөн техникалары әҙер.

- Әлбиттә, Әбйәлил юл ремонт-төҙөлөш идаралығына ҡушылғас, эштәр бер аҙ ҡатмарлашты. Әбйәлилгә барып йөрөүе лә алыҫыраҡ, ҡайһы бер вазифалар ҙа алмашынды. Әммә был үҙгәрештәр юлсыларҙың эш тәртибенә йоғонто яһамай - юлсылар һауа шарттарының ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, тәүлек әйләнәһенә үҙ эштәрен намыҫлы башҡара. Береһен дә айырып әйтке килмәй, барыһы ла тырыша, һәр кем үҙ эшенең оҫтаһы, - ти кадрҙар буйынса белгес Хафиза Аллабирҙина.

Салауат Баязитов, Ноғоман Теләүбаев, Фәнис Буранбаев, Азат Фәтхетдинов Луганск Халыҡ Республикаһында Красный Луч ҡалаһында асфальт түшәйҙәр. Илдус Йортбағышев исемле егет юл хужалығы өлкәһендә бер нисә ай ғына эшләп өлгөрә - мобилизацияланып, махсус хәрби операцияға юллана. Водителдәр Фәтих Мансуров, Илфат Ишбулатов, Илнур Ҡасҡынбаев, Марсель Миндеғолов, Ришат Искужин, Рөстәм Сафиндар ваҡыт менән һынашмай, алһыҙ-ялһыҙ эшләгән тырыш эшселәр рәтендә. Тракторсы Фәнил Мырҙабаев, асфальт һалыусы машинист Иҙел Абдуллин, йөк тейәү машинисы Ильяс Сафин да йөкмәтелгән бурыстарын еренә еткереп башҡаралар.



Каток машинисы Данил Буранов, прораб Даян Ҡаһармановтың эше менән дә ҡәнәғәт етәкселек. Юлдарҙың сифатын тәьмин итеүҙә уларҙың өлөше ҙур.

Еңел булмаған шарттарҙа, эҫе һәм һыуыҡ, ямғыр һәм ҡар, тип тормай, район юлдарын яҡшыртыуға үҙ өлөшөн индергән юл хужалығы хеҙмәткәрҙәренең һәр ҡайһыһы мөһим эш башҡара. Һәр күрһәткес һәм һандар артында уларҙың яуаплы һәм көндәлек хеҙмәте ята.

**Ә. ЮЛСУРИНА.**

podpiska.pochta.ru

ЮБИЛЯРЫБЫҘ

# 95 йәшлек аҡһаҡал

(Дауамы. Башы 1-се биттә).

Фрунзе исемендәге колхозда эшләп йөрөгән еренән Башҡорт дәүләт тәбиғәт курсаулығының ул ваҡыттағы директоры юҡҡа ғына тап уны эшкә саҡырып алмағандыр. Пенсияға киткәнсе бер урында – ҡурсаулыҡта тир түгә ул. Урмансы-солоксо була. Ғүмере урманда үтә.

-Аҡсаһы әҙ, тип тә тормаһым, эшләнем дә эшләнем. Эш хаҡым башта 30 һум, унан 40 һум булды, 1988 йылда пенсияға 70 һум эш хаҡы менән сыҡтым, - ти ул.

-Мин үҙем Бөрйән районының Түбәнге Нөгөш ауылында тыуһам да, яҙмыш еләрҙе элекке Йомағужа ауылына (хәҙерге Мәләүез районының Кәшәлә ауылы) алып килгән. Уның үҙ сәбәптәре бар. Барыбыҙға мәғлүм, 1930-1931 йылдарҙа коллективлаштырыу була. Беҙҙең тирәләге 5 ауыл: Гәлиәкбәр, Үрге Нөгөш, Түбәнге Нөгөш, Ҡалғаһау, Кәшәлә ауылдары халҡы бергә берләшеп, "Ҡыҙыл байраҡ" промколхозын ойоштора. Бына ошо яңы ойошторолған хужалыҡҡа заманына күрә белемле һәм беренсе комсомол ағзаһы буларак, 24 йәшлек минең атайҙы – Исәнбаев Ғәбәйҙулланы рәйес итеп һайлайҙар.

Әммә айырым хужалыҡтан ҡапыл ғына берләшеү ҡайһы берәүҙәргә оҡшап та етмәгәндер - тырышып эшләп йөрөгән минең атайҙың өҫтөнән, төрлө бәләләр яғып, район етәкселәренә ялыу яҙалар, төрмә менән янайҙар. Әлбиттә, тәжрибәһеҙ йәш кешене был тетрәндерә һәм ул нахаҡ бәләнән ҡотолоу юлын эҙләй. Ахырҙа, 1932 йылда, 26 йәшлек кенә сағында, һуңғы ҡарарға килеп, үҙен-үҙе атып үлтерә. Бына шулай ошаҡсылар, хөсөтсөләр арҡаһында йәш рәйес золом ҡорбанына әйләнә, - ти Исмәғил ағай.

Ҡатыны Зәйтүнә Ахун ҡыҙы менән улар 11 балаға ғүмер бирә.

-Зәйтүнәм ныҡлы, ышаныслы тылым булды. Мин эштән бушаманым тиерлек. Ишле малды, кош-ҡортто ҡараны, балаларҙы эшкә өйрәтеп үҫтерҙе. Ҡыҫҡаһы, уның тырышлығы менән өйөбөҙҙән ҡот, ырыҫ, өҫтәлебеҙҙән ризыҡ өҙөлмәне. Картуфты, йәшелсәне балалар менән мул үҫтерҙеләр, - ти ағай.

-Изге йәнле, күңеле киң кешенең йөҙө нурлы була. Күпме хәтерләйем, атайбыҙ Исмәғил Яманаев яҡты ҡарашлы, яғымлы, унан һәр саҡ ниндәйҙер йылылыҡ бөркөлөп тора.

Ул ғүмере буйы халыҡҡа хеҙмәт итте. 3 йыл армиянан һуң промартелдә ҡыуғында йөрөй. Атайыбыҙ ғәҙеллекте ярата, изге күңелле, һәр ваҡыт барыһына ла ярҙам итергә әҙер. Оҙаҡ йылдар "Шүлгән-Таш" ҡурсаулығында эшләп, хаҡлы ялға сыкты. Уның намыҫлы хеҙмәте, һөнәренә тоғролоғо Башҡорт АССР-ы Юғары Советы президиумының Маҡтау грамотаһы менән билдәләнде. Бынан тыш, ул һәр ваҡыт яҙышырға яратты һәм "Таң" гәзитенән әүҙем хәбәрсеһе лә булды. Фәһемле мәҡәләләре, шиғырҙары республика матбуғатында ла донъя күреп торҙо. Уның "Үкенерлек түгел үткәндәр", "Тауҙарҙан бейек кеше" тигән китаптары донъя күрҙе. Йыр-моңға ғашиҡ атайым ҡурайҙа, гармунда оҫта уйнай, ә моңло тауышы барыһын да әсир итә.

Инде 100-ҙө ваҡлаһа ла, ҡулынан ҡәләмен төшөрмәй, ижади эҙләнеүен дауам итә, барыбыҙҙың тормошона йәм биреп йәшәй ул, - тип әйтә икән балалары, тимәк, балалары өсөн ысын Атай өлгөһө лә була алған ул!

Әйткәндәй, Яманаевтарҙың балалары ла йыр-моңға әүәҫ. Әсә һөтө, ата ҡаны менән күскәндер: Зәйтүнә апай гармунда, Исмәғил ағай ҡурайҙа һыҙҙырған, икеһе лә матур йырлаған.

Зәйтүнә Ахун ҡыҙы менән нисек осрашыу-танышыуҙары тураһында үҙенең «Үкенерлек түгел үткәндәр» тигән китабында И. Яманаев бына нимәләр яҙған:

«1955 йылда ҡыуғын менән ағас ағыҙҙыҡ. Ағасты тотоу өсөн Мәләүез районының Смаҡ ауылында канат королғайны. Канатка йыйылған ағасты ҡарап тороу өсөн һаҡсылар ҙа бар. 10 көндә ағастарҙы ағыҙып, канатка барып еттек. Акса алып, бер аҙ байрам иттек.

Шул саҡ мин яр башында 4-5 ҡыҙҙы күреп ҡалдым, улар араһында бер туған һеңлем Миңлегөл дә бар. "Абзый, мин һиңә кәләш күрҙем. Анауы ултырған өйгә бар әле, ул яңғыҙ ғына", -ти. "Кит, юкты һөйләп торма. Бынан кәләш һөйрәп йөрөргә минең башҡа тай типмәгән, үҙебеҙҙең Бөрйәндә ҡыҙҙар аҙмы ни", - тиһәм дә, тегене барып күреп сығырға уйланым.

Һалдат гимнастеркаһын сисмәгәйнем әле. Башта - һалдат фуражкаһы. Көн эҫе булғас, яланаяҡ һеңлем күрһәткән теге өйгә барып индем. "Беҙҙең ҡыҙҙар һеҙҙә сәй эсеп сыҡҡан икән. Миңә лә сәй эсеп сығырға кәңәш бирҙеләр", - тигән булам. Һөйләшә башлағас, уның 1932 йылда Кәшәлә ауылында тыуғанлығын, балалыҡ дуҫым Таһир менән үҙен сәңгелдәктә бәүетеп йоҡлатҡаныбыҙҙы исләнем. Мин уны кис клубка саҡырҙым. Ул түңәрәк уртаһында ултырғыска ултырған да, тальян гармунда уйнап йәштәрҙе бейетә.

Юл буйында бер ауыл магазинынан тальян гармун һатып алғайным. Фатирҙан барып тегене алып килдек. Гармунды теге ҡыҙға тотторҙом да: "Был гармун минән һиңә бүләк", - тинем. Бына шулан китте беҙҙең танышыу, күп тә үтмәй, ғүмерлеккә ҡауышыу.

Ҡыуғын начальнигы Ҡаһарманов Абдразаҡ, канат ҡорҙороп ятҡан Әхмәтов Хәлил, кассир Ғәбитов Мансур ағайҙар менән кәңәшләшеп, туй йолаһы үткәрҙек. Бөрйәнгә кәләш алып ҡайтыу үҙе бер тарих булды. Ҡайҙа йәйәү, ҡайҙа ат менән ике көндә 75 саҡырым ара юлды үтеп ҡайтып еттек. Юлда теге гармун бик ярап ҡалды. Ял итергә ултырғанда Зәйтүнәм уйнап ебәрһә, күңелдәр күтәрелеп, арыуҙар бөтөп ҡалғандай була. Бына шулай итеп мин кәләшле булдым.

Икебеҙ ҙә билде биштән быуып промартелдә эшләй башланыҡ. Тырышып эшләп, Үрге Нөгөштә өй һалдыҡ. Мал, ҡош-ҡорт үрсеттек. Шөкөр, бер-бер артлы балалар донъяға килә торҙо. Үрге Нөгөштә 22 йыл йәшәгәндән һуң, Гәлиәкбәргә күстек...»

- Беҙҙең йәшлек менән сағыштырғанда, бөгөнгө тормош әкиәт инде ул. Хәҙер ауыл тулы техника. Ә беҙҙең йәшлек йылдарында ҡайҙа ул техника. Иң ҙур техника ат булды. Уныһы ла булманы әле ул. Бөтә нәмәне арҡаға йөкләп ташыныҡ, хатта сәсеү орлоғона хәтлем. Хәҙерге йәштәр уны күҙ алдына ла килтерә алмайҙыр. Ҡышҡыһын, ярай, сана тотонаһың. Өҫтәүенә, хәҙерге һымаҡ юлдар ҡайҙа, - тип тә ғүмер хәтирәләрен барланы ветеран.

95 йәшендә лә зиһене салт әңгәмәләшем һуңғы араларҙа бер-бер артлы ике инсульт кисергән. Шуға ҡулы менән яфаланыңҡырай икән.

Ауыртҡан ҡулын ыуып алғас, хәтирәләрен артабан дауам итә.

-Кеше һуғыш бөтөү менән генә етеш йәшәп китмәне әле. Хатта унан һуң да байтаҡ яфаланды халыҡ. Үткән быуаттың 57-58-се йылдарында ғына тормош әҙерәк иркенәйҙе, магазиндарҙа ризыҡ иркен күренә башланы. Халыҡ ныҡлап икмәккә туйынды, - ти күпте күргән быуат тиңдәше уҙаман.

Бынан теүәл 10 йыл элек Исмәғил Ғәбәйҙулла улының 85 йәшендә лә булғайным. Ауыл мәҙәниәт йортонда матур кисә үткәреп ҙурлағайнылар ауыл аҡһаҡалын. Шул кисәлә хәҙер инде баҡый донъяһына күскән ауыл аҡһаҡалы Ағзам ағай Әминев әйткән шиғыр юлдары хәтергә төштө.

**Эй, Хоҙайым,**
**бирер бәхетеңдең**
**Күберәген**
**ҡалдыр ҡартлыҡҡа,**

тигәйне ул ҡотлау һүҙендә. Ошо һүҙҙәрҙә күпме мәғәнә, тормош асылы, аҡыл ятҡанын үҙең дә ологая килә нығыраҡ аңлайһың икән...

Ғүмере буйы эшләп тапҡан хәләл икмәген ашап, донъяға яратып баҡҡан асыҡ йөҙлө, тура һүҙле, ғәҙел ҡарашлы һәм үҙ йырҙары (мәҡәләләре, шиғырҙары) аша кешеләрҙе изгелеккә, яҡшылыҡҡа өндәп йәшәүсе авторыбыҙ Исмәғил Ғәбәйҙулла улы Яманаевтың 95 йәшендә лә мәрәкәсел йылмайып, донъяға яратып бағыуы, ҡартлығында ла һәр көндән бер моң, көй табырға тырышып тороуы үҙе ҡартлыҡ бәхете, үҙе йәшәү ҡаһарманлығы түгелме лә 95-кә етеү үҙе генә лә һирәктәргә генә тейгән бәхет өлөшө түгелме?!..

...Гәлиәкбәрҙән ҡайтыу юлында япраҡһыҙ ҡалған ағастар болоттар араһынан баҡҡан ҡояштың һаранырак булһа ла нурына ҡойоноп, урман әллә ниндәй бер үҙенсәлекле матурлыҡ менән солғанған ине. Әйе, күп нәмә кешенең күңел торошона, тормош матурлығын күрә белеүенә бәйле, ахыры. Шул иҫәптән... ғүмер мәғәнәһе һәм оҙайлығы ла...

**Т. БАҺАУЕТДИНОВА.**



## “Мөнир, тормошома ҡот ҡундырып киттең бит, әй…” йәки Ил ағаһы янында

Бынан теүәл бер йыл элек Гәлиәкбәргә юл төшөп, күптәнге танышым, ҡәләмдәшем, 94 йәшлек Яманаев Исмәғил Ғәбәйҙулла улына инеп сыҡтым. Эй ҡыуанды оло кеше. Һүҙгә-һүҙ бәйләнеп, күңелле генә итеп байтаҡ һөйләшеп ултырҙыҡ.

Исмәғил ағай ҙур тормош юлы үткән, күпте күргән, күпте белгән бай тәжрибәле, аҡыллы, фекерле кеше. 1928 йылғы кешенең, аңлашыла инде, ғүмер юлындағы һәр боролош, һәр туҡталыш, һәр ынтылыш илдеке менән бер ҡатарҙан булған, тарихҡа шанлы ла, данлы ла булып ингән 30-сы, 40-сы, 50-се, 60-сы йылдарҙың ел-дауылдары сыныҡтырһа-сыныҡтырған, һындыра алмаған. Бала сағын ауыр һуғыш йылдарында үткәргән, малай ғына көйөнә промартелдә эш башлаған, армия хеҙмәтен үткән, колхозда, күп йылдар "Шүлгән-Таш" ҡурсаулығы солоксолоғонда эшләп хаҡлы ялға сыҡҡан Исмәғил ағай бөгөн ил ағаһы - аҡһаҡал дәрәжәһендә. Осороңа күрә уҡыу эләкмәгән, эш баҫҡан, ләкин нәҫ баҫмаған рухлы, зиһенле уҙаманды кешеләргә әйтер һүҙле, яҡташтарын рухландырыр оло йөрәкле булыуы йәшләй ҡулына ҡәләм тотторған. "Таң" гәзитенең үткер ҡәләмле бик-бик күптәнге әүҙем хәбәрсеһе ул И.Яманаев.

...Ағай менән Гәлиәкбәр урамынан үттек, мәсеттә булдыҡ, Нөгөш буйына төштөк. Оло кешегә күп кәрәкме ни, саҡ ҡына иғтибар - оло ҡыуаныс, хәлен генә белеп сығыуҙан да хәлләнгәндәй, ятҡан урынынан тора һалып, матур күлдәген кейеп эйәреп сыға, үҙендә әллә ҡайҙарға барып әйләнерҙәй көс-ҡеүәт таба...

Осрашыуыбыҙ аҙағында: "Бына, Мөнир, уйламағанда килеп инеп, тормошома бер ҡот ҡундырып киттең бит әй", - тиеүе генә лә ҙур мәғәнә ине...

**М. ФӘЙЗУЛЛИН.**

САРАЛАР

# Ҡыпсаҡта - мобиль технопарк

**Әбделмәмбәт мәктәбе яңылыҡҡа ынтылышы, заман менән бергә атлауы, белем биреүгә үҙенсәлекле ҡарашы менән айырылып тора. Шуға күрә лә тап ошо мәктәптә районыбыҙҙа беренселәрҙән булып “Кванториум” мобиль технопаркы асылыуы һис тә ғәжәп түгел.**

Башҡортостанда иң беренсе мобиль технопарк 2020 йылда “Мәғариф” милли проекты сиктәрендә тормошҡа ашырыла. Ул өҫтәмә белем биреү учреждениелары булмаған алыҫ ауылдарҙағы балаларға республика бюджеты иҫәбенә фәнни-ғәмәли һәм техник йүнәлештәге программалар буйынса өҫтәмә белем алырға мөмкинселек бирә. Мобиль технопарктың маҡсаты - уҡыусылар араһында инженерлыҡ һәм фәнни һөнәрҙәрҙең абруйын арттырыу, инженер кадрҙары әҙерләүгә булышлыҡ итеү.

Әбделмәмбәт мәктәбе Рәсәй кимәлендә үткән конкурсҡа ғариза нигеҙендә һайлап алына. Бөгөн иһә был мәктәптә уҡыусылар сәнғәт дизайны, виртуаль ысынбарлыҡ, квадрокоптер һәм башҡа йүнәлештәр буйынса өҫтәлмә белем ала. Мәктәптең өс кабинетында лазер станоктары, 3D-принтерҙар, 3D-ручкалар, квадрокоптерҙар, квантумдар өсөн ҡорамалдар ҡуйылған. Дәрестәрҙе Өфө ҡалаһынан килгән белгестәр – Байназаров Ғәфүр Юлай улы, Сәләмова Гөлназ Рәсих ҡыҙы, Минһажев Руслан Флорид улы алып бара. Уҡыу ваҡытында балалар заманса ҡоролмаларҙа эшләргә өйрәнә, инновацион технологиялар уйлап табыу, һынау мөмкинлегенә эйә буласаҡ. Ҡыҫҡаһы, IT өлкәһендәге белгестәрҙең эштәре менән танышасаҡтар.

Мобиль технопаркты асыу тантанаһында район мәғариф бүлеге етәксеһе Илшат Сәйфитдинов балаларҙы шундай зур мөмкинлек алыуҙары менән ҡотланы. Мәктәп директоры Инсур Үтәбаев өҫтәлмә дәрестәрҙең теҙмәһе менән таныштырҙы һәм Әбделмәмбәт мәктәбенең Сәнәғәт министрлығының пилотһыҙ осоу аппараттары базаһына индерелеүе хаҡында хәбәр итте.

Артабан йыһазландырылған кабинеттарҙа тәүге дәрестәр башланды.

Кванториум – белем биреү системаһының яңы баҫҡысы һәм балаларҙың ошо өлкәлә һәләттәрен асыуҙың бер юлы. Был проект уҡыусыларҙың белем сифатын күтәреүҙә, киләсәктә һөнәр һайлауҙа зур йүнәлеш бирер, яңы офоҡтар асыр.

**А.УРАЗАЕВА.**





ПЕДАГОГ ҺӘМ ОСТАЗ ЙЫЛЫ

# Уҡытыусыларҙы зурланылар



Уҡытыусы һәм остаз йылына ҡарата мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре, китапханасылар Зәлиә Тулыбаева һәм Фәриә Тимерғәлина Мораҙым мәктәбендә оҙаҡ йылдар уҡытҡан хаҡлы ялдағы мөғәллимдәрҙе һәм әлеге көндә эшләп йөрөгән уҡытыусыларҙы зур сараға йыйҙы.

Йәмле, йәнле итеп алып барылған “Уҡытыусы - бөйөк исем” тип аталған әҙәби музыкаль кисә төрлө ҡыҙыҡлы һорауҙар, уйындар менән бергә үрелеп барҙы. Фәриә Тимерғәлина һәм Флүзә Малакаевалар тәүге уҡытыусылары Сәриә Аҫылғужинаны ҡотлап, йыр һәм бүләк тапшырҙылар. Динә Моратшина йырына ҡушып бөтә уҡытыусыларға әҙерләгән бүләктәрен бирһә, А. Тулыбаева “Аҡ сәскәләр” йырын башҡарҙы. “Аратау” ансамбле ҡыҙҙарының сығышы байрамға йәм өҫтәне. Кисә күңелле сәй табыны менән дауам итте.

Байрам хәтирәләре күңелдәрҙә оҙаҡ һаҡланыр. Сарала ҡатнашыусылар ойоштороусыларға рәхмәттәр әйтеп, эштәрендә уңыштар теләп таралыштылар.

**З. ТУЛЫБАЕВА,**
**Мораҙым ауылы.**

СОЦИАЛЬ МӨХИТ

# Социаль фонд тарафынан ғаризаһыҙ нигеҙҙә инвалидлыҡ буйынса 18 мең пенсия тәғәйенләнгән

Социаль Фондтың Башҡортостан Республикаһы буйынса бүлексәһе тарафынан әлек пенсионер булмаған 18 мең гражданға страховка һәм социаль пенсиялар тәғәйенләнде. Был түләүҙәр граждандың ғаризаһынан тыш, инвалидтарҙың Федераль реестрынан килгән мәғлүмәттәр нигеҙендә документлаштырылды.

Пенсия тәғәйенләү тураһындағы ҡарарҙы Социаль фонд медик-социаль экспертиза (МСЭ) күрһәтмәләре буйынса граждандарҙан ғариза ҡабул итмәйенсә ҡабул итә. Билдәләнгән инвалидлыҡ тураһындағы мәғлүмәт МСЭ органдары тарафынан инвалидтар реестрына йүнәлтелә. Ошонан һуң Соцфонд 5 эш көнө дауамында пенсияны гражданинға документлаштыра. Шул уҡ ваҡытта гражданиндың дәүләт порталындағы шәхси кабинетына йәки почта аша был турала иҫкәрмә (уведомление) ебәрелә.

Пенсияны гражданинға алып барыу элек Социаль фонд тарафынан тәғәйенләнгән түләүҙәрҙе таратыу ысулы менән уҡ ғәмәлгә ашырыла. Әгәр ҙә быға тиклем фонд аша гражданин бер ниндәй ҙә түләүҙәр алмаған икән, гражданинға дәүләт хеҙмәте порталындағы үҙенең шәхси кабинеты аша йәки Соцфондтың клиент хеҙмәте аша, шулай уҡ күп функциялы үҙәк (МФЦ) аша пенсияһын алыу ысулын һайларға кәрәк була. Быны шәхсән үҙең йәки законлы вәкилең аша эшләргә мөмкин.

Пенсиялар тәғәйенләүҙән тыш, Социаль фонд проактив форматта инвалидлыҡтары булған граждандарға түләүҙәрҙе (ҡайтанан иҫәпләүҙәрҙе) бойомға ашыра һәм уларға социаль түләүҙәр билдәләй. Мәсәлән, ай һайын бирелә торған түләүҙәр һәм социаль хеҙмәттәр йыйылмаһы. Һуңғылары иҫәбенә дарыуҙар һәм медицина изделиелары, шифаханаларға юллама, шулай уҡ ҡала яны электричкаларында бушлай йөрөү инә.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, инвалидлыҡ буйынса пенсия инвалидлыҡ билдәләнгәнгә тиклем пенсионер булмаған граждандарға тәғәйенләнә. Әгәр инвалидлыҡ быға тиклем пенсия алыусы гражданинға документлаштырыла икән, уның элекке пенсияһына өҫтәмә итеп автоматик рәүештә ай һайын бирелә торған түләүҙәр өҫтәлә.

Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусылар, «Житель блокадного Ленинграда», «Житель осажденного Севастополя», «Житель осажденного Сталинграда» билдәләре менән наградланған, шулай уҡ хәрби йәрәхәт арҡаһында инвалид булған граждандар федераль ҡануниәт менән нығытылған нигеҙҙә бер юлы ике пенсия алыуға хоҡуҡлы – инвалидлыҡ буйынса дәүләт пенсияһын һәм ҡартлыҡ буйынса страховка пенсияһын.

**Рәсәй Федерацияһы Социаль фондының Башҡортостан Республикаһы буйынса бүлексәһенең матбуғат хеҙмәте.**

ЮХХДИ ХӘБӘР ИТӘ

# Районда 9 айҙа 81 юл-транспорт ваҡиғаһы теркәлгән

**Рәсәй Эске эштәр министрлығының Бөрйән районы буйынса бүлексәһенең дәүләт автоинспекцияһы ағымдағы йылдың 9 айлыҡ эшмәкәрлегенә һығымта яһаны. Мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, 2023 йылдың 9 айында юлдарҙағы аварияларҙың төп күрһәткестәренең түбәнәйеүе күҙәтелә.**

9 айҙа Бөрйән районы биләмәһендә 81 юл-транспорт ваҡиғаһы (артабан – ДТП) теркәлгән. Шуларҙың 6 осрағында кешеләр зыян күргән. Һөҙөмтәлә, 1 кеше һәләк булған, 6 кеше төрлө йәрәхәттәр алған. Эскән килеш автомобиль руле артына ултырғандар ғәйебе менән 8 ДТП теркәлгән. Йәйәүлеләр ҡатнашлығында юл-транспорт ваҡиғалары булмаған. 16 йәшкә тиклемге бәлиғ булмаған балалар ҡатнашлығында 3 ДТП теркәлгән, уларҙа 16 йәшкә тиклемге 3 бала йәрәхәтләнгән.

Дөйөм алғанда, ДТП-ларҙа 128 транспорт сараһы зыян күргән.

2023 йылдың 9 айы эсендәге ДТП-ларҙың төп төрҙәре: автомобилдәр бәрелешеүе – 27, туктап торған техникаға төкөү – 18, юлдан ситкә сығып китеү – 12, хайуандарҙы бәрҙереү – 11.

ДТП-ларҙың урындарына килгәндә, иң күп юл-транспорт ваҡиғалары Иҫке Собханғол ауылы урамдарында, Ҡағы – Иҫке Собханғол юлында. Уларға райондағы ДТП-ларҙың 67,5 проценты тура килә.

Урындағы әһәмиәттәге автомобиль юлдарындағы юл-транспорт ваҡиғаларының өстөнлөк иткән төрҙәре - транспорт сараларының бәрелешеүе һәм хайуандарға төкөү.

Йәнә шуны билдәләп үтергә кәрәк, 16 йәшкә тиклемге балалар ҡатнашлығындағы юл-транспорт ваҡиғаларының һаны арткан. Быларҙың төп сәбәптәре – үсмерҙәрҙең транспорт саралары менән идара итеүгә хокуктары булмаған килеш мопедтар һәм мотоциклдар менән идара итеүе һәм тиҙлек режимын һаҡламауы. Уларҙа 16 йәшкә тиклемге 3 бала зыян күрҙе.

2023 йылдың 9 айы эсендә Рәсәй Эске эштәр министрлығының Бөрйән районы буйынса бүлексәһенең дәүләт автоинспекцияһы тарафынан юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген тәьмин итеү буйынса 2339 административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында эш ҡуҙғатылған. Юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен тупаҫ боҙоуҙың 241 осрағы теркәлгән. Алкоголь ҡулланған водителдәргә ҡарата 89 материал төҙөлгән. Шуларҙың 20-һе – РФ Енәйәт кодексының 264.1 статьяһы буйынса.

ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре водителдәргә һәм йәйәүлеләргә юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен теүәл үтәргә кәрәклеген тағы ла бер тапҡыр иҫкәртә.

ДТП-ларға статистик анализ уларҙың төп сәбәптәре түбәндәгеләр икәнен күрһәтә: водителдәрҙең юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен үтәмәүе, юл киҫелештәрендә сиратты һаҡламау, йәйәүлеләр үтә торған урындарҙы үтеү ҡағиҙәһен боҙоу, ҡаршы хәрәкәт итеүсе транспорт өсөн тәғәйенләнгән һыҙатҡа сығыу.



Был тәү ҡарашҡа ябай ғына күренгән ҡағиҙәләрҙе иҫтә тотоу һәм үтәү бик мөһим. Уларҙы һаҡлау һәм үтәү һеҙҙең үҙегеҙҙең һәм яҡындарығыҙҙың ғүмерен һәм сәләмәтлеген һаҡларға ярҙам итәсәк.

Әйтәйек, юлда билдәләнгән тиҙлек режимынан автомобиленең тиҙлеген арттырыусы һәм юл билдәләрен инҡар итеүсе водитель ошо ҡылығы менән үҙенең автомобилендә булғандарҙы ғына түгел, тирә-яҡтағы транспорт сараларын һәм уларҙа булған кешеләрҙе лә ниндәй хәүеф аҫтына ҡуйыуын аңларға тейеш. Автомобиль ҙур хәүеф сығанағы булып тора. Шуға күрә уның менән идара итеүгә бик иғтибарлы һәм яуаплы ҡарарға кәрәк.

Юл хәрәкәте ҡағиҙәләре талаптарына ярашлы, йәйәүлеләр үтә торған үткәүелгә яҡынлашҡан саҡта водитель тиҙлеген кәметергә, кәрәк булғанда, йәйәүлегә юл бирер өсөн туҡтарға бурыслы. Шул уҡ ваҡытта, үҙ сиратында, йәйәүле лә, водителдәр уны үткәрергә әҙер икәнлегенә инанмайынса, автомобиль юлы аша сығырға ынтылырға тейеш түгел.

Эске эштәр министрлығының Бөрйән районы буйынса бүлексәһенең дәүләт автоинспекцияһы хеҙмәткәрҙәре юл хәрәкәтендә ҡатнашыусыларҙың барыһын да юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен теүәл үтәргә, юлдарҙа иғтибарлы һәм уяу булырға саҡыра. Водителдәр юл хәрәкәтендә ҡатнашыусыларҙың ғүмере һәм сәләмәтлеге уның ғәмәлдәренә бәйле икәнен бер минутҡа ла онотторға тейеш түгел. Йәйәүлеләргә уның өсөн махсус тәғәйенләнмәгән ерҙә юл аша сығырға ярамай икәнен аңдарына һеңдереү мөһим. Тәүлектең ҡараңғы мәлендә һәм юлдарҙа кар-ямғырға, томанға бәйле күреү насарайған осорҙа ҡырҙан күренеп торһон өсөн кейемдәргә яҡтылыҡты сағылдырыусы элементтар тағырға кәңәш ителә.

Балаларығыҙға даими рәүештә юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен һәм юл аша тәртипкә һалынған йәки тәртипкә һалынмаған йәйәүлеләр сыға торған урындарҙа юл аша сығыу ҡағиҙәләрен иҫләтеп торорға онотмағыҙ. Автомобиль юлы аша үтергә кәрәк булғанда, иң башта ике яҡты ла ҡарап алырға һәм автомобилдәр йәйәүлене үткәрергә туҡтағандар икәнен күргәс кенә юл аша сығырға кәрәк. Юл аша сығып барғанда ҡолаҡҡа наушниктар ҡуйып, музыка тыңлау йәки телефондан һөйләшеп барыу ярамай. Был баланың юлға ҡарата иғтибарын кәметә һәм йәйәүле үҙенә яҡынлашып килгән хәүеф сығанағын – автомобилде аңғармай ҡалыуы ихтимал. Автомобиль юлына ҡапыл йүгереп сығырға ярамай. Был йәйәүлеләр өсөн тәғәйенләнгән юл аша үтеү урынына ла ҡағыла.

Һеҙ юлда осрауығыҙ ихтимал булған барлыҡ хәлдәрҙе лә алдан күҙаллаған ҡағиҙәләр юҡ, әлбиттә. Берәүҙән тыш. Ул да булһа – юлдарҙа нык иғтибарлы һәм уяу булыу.

Хәтерегеҙҙә тотоғоҙ, һеҙҙең сәләмәтлегегеҙ һәм ғүмерегеҙ, шулай уҡ юл хәрәкәтендә ҡатнашыусы башҡа кешеләрҙең ғүмере һәм сәләмәтлеге һеҙҙең урамда һәм юлда үҙегеҙҙе нисек тотоуығыҙға нык бәйле.

**С. БУРАНБАЕВ,
Рәсәй Эске эштәр министрлығының Бөрйән районы буйынса бүлексәһенең ЮХХДИ инспекторы, полицияның өлкән лейтенанты.**

# Ришүәт биргән өсөн яуаплылыҡ ҙур

**Бөрйән районының дәүләт автоинспекцияһы водителдәрҙе полиция хеҙмәткәрҙәренә ришүәт биргән өсөн яуаплылыҡ хаҡында иҫкәртә. ЮХХДИ хеҙмәткәренә ришүәт бирергә маташыуҙар теркәләсәк һәм енәйәт эше ҡуҙғатыу өсөн нигеҙ булып торасаҡ.**

Хеҙмәткәрҙе ришүәт алырға ҡотортторға маташыу ҙур штраф алыуға һәм хатта иректән мәхрүм ителеүгә килтереүе ихтимал.

Рәсәй Федерацияһы Енәйәт кодексының 291-се статьяһының 3-сө өлөшөнә ярашлы, вазифалы кешегә шәхсән йәки аралашсы аша ришүәт биргән өсөн ришүәт суммаһының утыҙ тапҡырҙан алтмыш тапҡырға тиклем күләмендә штраф һалына йәки ришүәт суммаһының утыҙ тапҡырға тиклем күләмендә штраф менән һигеҙ йылға тиклем иректән мәхрүм итеү яҙаһы ҡаралған.

Дәүләт автоинспекцияһы хеҙмәткәрҙәре үҙҙәренең хоҡуҡтарын, бурыстарын һәм бындай осраҡтарҙа нисек эш итергә кәрәклеген яҡшы белә.

Автоинспекцияның патруль автомобилдәре видеотеркәү саралары менән йыһазландырылған, улар юлда ла, автомобиль салонында ла нимә барғанын теркәй.

Граждандың полиция хеҙмәткәренә ришүәт тәҡдим иткән яҙмаһы ғәйепләнеүсегә ҡарата ҡуҙғатылған енәйәт эше материалдарына беркетелергә мөмкин. Дәүләт автоинспекцияһы юл хәрәкәтендә ҡатнашыусыларҙың барыһын да юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙмаҫҡа һәм административ яуаплылыҡтан ҡасып ҡалырға маташып, вазифалы кешеләргә бүләктәр тәҡдим итмәҫкә саҡыра.

**С. БУРАНБАЕВ,
ЮХХДИ инспекторы,
өлкән лейтенант.**

ИҒТИБАР!

# Башҡортостандың иң яҡшы участковыйына — 100 мең һум

2023 йылда «Башҡортостан Республикаһында иң яҡшы участковый», «Башҡортостан Республикаһында бәлиғ булмағандар эштәре буйынса иң яҡшы инспектор» һәм «Административ күҙәтеүҙе тормошҡа ашырыу буйынса иң яҡшы инспектор» һөнәри оҫталыҡ конкурстары үткәрелә.

Конкурстар ыңғай тәжрибәне таратыу, полиция хеҙмәткәрҙәренең һөнәри оҫталыҡ кимәлен өҙлөкһөҙ камиллаштырыу, шулай уҡ Рәсәйҙең Эске эштәр министрлығы системаһында полицияның участка уполномоченныйы хеҙмәте ойошторолоуға 100 йыл тулыуға арналған юбилей саралары алдынан уларҙы матди яҡтан дәртләндереү өсөн үткәрелә.

Почетлы исемдән тыш, аҡсалата приз фонды ҡаралған. Беренсе урынды алған иң яҡшы кала, ауыл участковыйҙарына һәм инспекторҙарына 100 мең һум тапшырыла, икенсе урынға — 75 мең һум, өсөнсө урынға — 50 мең һум. Еңеүселәр Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығы сайтында халыҡ тауыш биреүе барышында асыҡлана.

podpiska.pochta.ru

АТАЙСАЛ

# Ауыл исемдәре тарих һаҡлай

**Мәксүт ауылы тураһында нимә билдәле?**

Мәксүт ауылы бик боронғо. Уның барлыҡҡа килеү ваҡыты билдәһеҙ. 1795 йылда 15 хужалыҡ һәм 80 кеше булыуы тураһында билдәле.

Йөҙ йылдан ашыу Мәксүт Ырымбур һәм Өфө губерналары сигендә була.



Ул ваҡытта Ағиҙел йылғаһы мөһим транспорт юлы булған: Мәксүт таможняһы мәғлүмәттәре буйынса, губерналарҙың сиген, мәҫәлән, 1905 йылда 25 судно һәм 917 һал үткән, 2111000 алтын һумлыҡ 2622000 бот йөк ташылған.

**Ҡотан**

Ҡотан ауылы XVIII быуат уртаһында (1760 йылдан һуң түгел) барлыҡҡа килә. XVIII быуат аҙағында ул әһәмиәтле мәҙәни үҙәккә әйләнә. Ауылда ҙур мәсет булғанлығы билдәле. Ул Пугачев етәкселегендәге ихтилал ваҡытында емерелгән.

Ауыл бер нисә тапҡыр исемен үҙгәртә. Һорау алыу мәғлүмәттәре буйынса, башта ул Мәсетле тип аталған (йәғни "мәсете бар" тигәнде аңлатҡан). Шулай уҡ Ҡотҡаҙан исеме лә билдәле.

1816 йылғы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса, ауыл Ҡотан исеме аҫтында телгә алына ("Ҡотан" һүҙе йәшәү көсө булған урынды аңлата).

Ауыл халҡы малсылыҡ, умартасылыҡ һәм урман хужалығы менән шөғөлләнгән. Йыл һайын йәй етеү менән йәйләүгә сыҡҡандар. Ауыл халҡының күсмә тораҡтары Күжә, Ҡаран һәм Балатуғай йылғалары буйында урынлашҡан. 1919 йылдан Ҡотан ауылы Йылайыр кантонының Бөрйән олоҫо составына инә, ә 1930 йылдан Бөрйән районы составында.

Ҡотан ауылы халҡы 1812 йылғы Ватан һуғышында әүҙем ҡатнаша. Хәҙер ауылда 363 кеше йәшәй.

**Ырғыҙлы**

Барон фон Сиверс Ырғыҙлы йылғаһы тамағында Вознесенск баҡыр иретеү заводын төҙөй. Завод 1756 йылда эшләй башлай. Ҡасабала 150 йорт төҙөлә, унда завод хеҙмәткәрҙәре һәм эшселәре йәшәй. Ҡазан өйәҙенән заводҡа мең крәҫтиән беркетелә. 4 айға 333 кешене этаплап эшкә ҡыуып килтерәләр.

Тау-урман башҡорттары ҡәбиләләренә күрше даланан ҡаҙаҡтар һәм нуғайҙар һөжүм иткән осорҙан беҙҙең көндәргә килеп еткән риүәйәт бар. Шундай һөжүмдәрҙең береһен кире ҡағыуҙа батырлығы һәм ҡаһарманлығы менән ир-егеттәрҙән бер нимәһе менән дә ҡалышмаған ҡыҙ ҡатнаша.

Иң киҫкен мәлдә, башҡорттар рәте һирәгәйә башлағас, ул атта сабып барышлай, баҫҡынсыларға барып бәрелә, уларҙы эйәрҙәренән сукмар менән ҡолата, уҡ менән атып йыға.

Батыр ҡыҙға ҡарап рухланған ир-егеттәр саҡырылмаған ҡунаҡтарҙы ҡыуып сығара. Тик бер кем дә һуғыш мәлендә ҡыҙҙың арҡаһына дошман уғы эләккәнен, уның үлемесле яраланғанын күрмәй. Һыуыҡ ҡулдары менән эйәренә йәбешеп, ҡыҙ ергә йығыла. Тоғро ат, хужабикәһен аяғына баҫырға саҡырып, кешнәй, аяғы менән ерҙе сапсый башлай. Ҡапыл ул тояҡтары менән һуҡҡан урында ер аҫтынан үтә күренмәле шаушыулы шишмә килеп сыға һәм болондар буйлап Ағиҙел яғына йүгерә. Шулай итеп йылға барлыҡҡа килә.

Быңдай ҡыйыу ҡыҙҙарҙы башҡортса "ир ҡыҙ" тип атайҙар, йәғни ҡыйыу ҡыҙ. Уның иҫтәлегенә йылғаға Ирҡыҙ тип исем бирәләр. Ә бында Вознесенск заводын төҙөргә ҡыуылған урыҫтар килеп ингәс, уның әйтелеше Иргизлы тип үҙгәртелә.

**Г. ХӘКИМОВА.**

ИМАН

# Мәсеттең ҡоймалары яңыртыла

Иҫке Собханғол ауылының «Әбделмән» мәсетенә имам итеп тәғәйенләнгән Илдар Бикмөхәмәтов, Әлфир Айытбаев, Илдар Хәсәнов, Әғләм Шәрипов, Азамат Бикмөхәмәтовтар мәсеттең тирә-яғын кәртәләйҙәр – ағас ҡоймаларҙы тимергә алыштыралар.

- Материал мәсеттең биләмәһен тулыһынса кәртәләп сығырға етә. Аҡса йыйыуҙа район халҡы әүҙем ҡатнашты, Ырымбур, Татарстан, Себер яҡтарынан да күсерҙеләр, - ти имам-хатип.



Күптән түгел улар Илдар Хәсәнов менән мәсет биләмәһендә аш-һыу әҙерләү өсөн япма ла эшләп ҡуйғандар.

Район мөхтәсибәте исеменән Хәсән хәҙрәт тә Илдар Бикмөхәмәтовтың эшмәкәрлегенә яҡшы баһа бирҙе.

**Ә. УРАЗАЕВА.**

ХӘҮЕФҺЕҘЛЕК

# Ут менән һаҡ булығыҙ!

Һалҡындар етеү менән көҙгө-ҡышҡы янғын хәүефе осоро ла башлана. Статистика күрһәтеүенсә, был ваҡытта янғындарҙың күбеһе торлаҡ секторында теркәлә. Был осорҙағы янғындарҙың төп сәбәбе - кеше факторы.

Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының Башҡортостан Республикаһы буйынса баш идаралығының Белорет район-ара күҙәтеү эшмәкәрлеге һәм профилактик эш бүлеге янғын хәүефе осоро етеү менән район халҡын янғын хәүефһеҙлеге сараларын үтәргә саҡыра.

**Электр приборҙарын файҙаланғанда ЯРАМАЙ:**

- һаҡлау үҙенсәлеген юғалтҡан электр сымдарын һәм кабелдәрен файҙаланырға;
- асыҡ электр үткәргесен обой менән йәбештереү йәки буяу менән буяу;
- боҙолған ут һүндергестәр, розеткалар менән файҙаланыу;
- электр лампочкаларын абажурҙар менән ябырға;
- терморегуляторҙар эшләмәгәндә электрон йылытыу приборҙарын ҡулланыу;
-ҙур ҡеүәтле бер нисә электр приборҙарын бер розеткаға тығырға.

Тиҙ тоҡаныусан яныу материалдарының электрон йылытыу приборҙары (электр плиталары, каминдар, грелкалар һ.б.) янында яҡын урынлашыуы йыш ҡына янғындар сығыуға сәбәпсе.



Өйҙән сығыр алдынан электр йылытыу һәм яҡтыртыу приборҙарының һүндерелеүен тикшерергә кәрәк.

**Газ ҡорамалдарын файҙаланғанда янғын хәүефһеҙлеге саралары**

Йорттағы газ ҡорамалдары төҙөк булырға һәм ул файҙаланыу буйынса техник талаптарға тап килергә тейеш.

**Газ ҡорамалдарын файҙаланғанда ТЫЙЫЛА:**

- бәләкәй балаларға һәм уны хәүефһеҙ файҙаланыу тәртибе менән таныш булмаған кешеләргә газ приборҙары менән файҙаланыу;
- шырпы ҡабыҙылғансы газ крандарын асыу;
- кейемде газ плитаһы өҫтөндә киптереү.

**Мейес менән йылытыу**

Йорттағы мейестәр төҙөк хәлдә һәм янғын йәһәтенән хәүефһеҙ булырға тейеш.

Шуны иҫтә тоторға кәрәк: янғын мейестең һәм төтөн каналдарының ярыҡтары аша ла барлыҡҡа килеүе ихтимал. Шуның менән бәйле, мейестәрҙе һәм төтөн торбаларын даими тикшереп торорға, кәрәк саҡта ремонт эшләргә кәрәк. Ҡором ултырмаларын алып ташлайҙар, мейесте ағарталар. Аҡлау ярыҡтарҙы ваҡытында асыҡларға мөмкинлек бирә.

Мейестәрҙе файҙаланғанда түбәндәге талаптарҙы үтәргә кәрәк:

- Осҡон төшөп янып китмәһен өсөн мейес алдында 50-70 сантиметрлыҡ размерҙа һәм 2 миллиметрҙан да кәм булмаған ҡалынлыҡтағы тимер лист ҡатып ҡуйылыуы шарт;
- мейескә ут яҡҡанда бензин, кәрәсин һәм башҡа тиҙ ҡабыныусан шыйыҡсалар ҡулланыу тыйыла;
- яғыулыҡ һәм башҡа яғыулыҡ материалдарын мейес алдына ултыртыу ярамай;
- мейестән алынған көлгә һыу ҡойолорға һәм ул хәүефһеҙ урынға ташланырға тейеш;
- ҡағиҙә булараҡ, төтөн юлдары йылытыу миҙгеле башланыр алдынан һәм йылытыу миҙгелендә ике айға бер тапҡыр ҡоромдан таҙартылырға тейеш.

Ут менән эш иткәндә хәүефһеҙлек сараларын үтәгеҙ! Оло быуынға иғтибар итегеҙ, балалар менән хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен ҡабатлағыҙ! Үҙегеҙҙе һаҡлағыҙ! Янғын сыҡҡанда 101 һәм 112 һандары буйынса шылтыратығыҙ.

**А. ҒӘБИТОВ, БР буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының баш идаралығының Белорет район-ара күҙәтеү эшмәкәрлеге һәм профилактик эш бүлеге начальнигы.**

КЕШЕ ҺӘМ ЗАКОН

# Автомобилеңә ялған дәүләт теркәү билдәләре ҡуйһаң…

Беҙ был мәҡәләлә машинаға дәүләт теркәү номерҙары урынлаштырыу тураһында һөйләрбеҙ. Тик һүҙ машинаның үҙенеке түгел, йәки яһалма номерҙар хаҡында. Тормошта шундайыраҡ та хәлдәр булғылай. Хатта уларҙың байтағы насар ниәттән дә булмаҫҡа мөмкин. Мәҫәлән, машинаны бер гараждан икенсеһенә генә лә номерлы итеп күсереү номерһыҙ килеш күсереүгә ҡарағанда күпкә еңелерәк. Номерҙарҙы хатта бер ниндәй проблемаһыҙ дуҫыңдан да алып торорға була һымаҡ. Бәғзеләр шулай итә лә... Йәки икенсе миҫал. Һеҙҙең номерҙарығыҙҙы урлағандар һәм һеҙ дәүләт теркәү номерҙары етештереүсе фирманан уның дубликатын һатып алдығыҙ, ти. Был законлы булырмы? Үҙегеҙ беләһегеҙ, тормошта ундай хәлдәр ҙә булғылай.

Беҙ был мәҡәләлә “Яһалма дәүләт теркәү номерҙары ҡуйылған автомобиль менән идара иткән хәлдә нимә булырға мөмкин һуң?” тигән һорауға яуап бирергә тырышмаҡсабыҙ.

Теманы был юлға барырға водителде нимә мәжбүр итеүе буйынса түгел, әгәр ошондай юлға барған водителдең был ҡылығы тәртип һаҡсылары тарафынан асыҡланған хәлдә уны ниндәй яза көтөүе йүнәлешендә асмаҡсыбыҙ. Йәғни полиция хеҙмәткәре юлда туҡтатып, машинаның номерҙары ялған икәнен белһә, был техникаға менән идара иткән водителде нимә көтә? Ә ялғанды асыҡлауы ауыр түгел. Әгәр ул документтар менән тура килмәһә, бигерәк тә еңел. Төрлө кимәлдәге шәхестәр өсөн яуаплылыҡ саралары ла төрлөсә: мәҫәлән, айырым кеше, вазифалы йәки юридик шәхес. Юридик берәмектәр өсөн штрафтар хатта бик тә ҙур ғына. Ләкин барыһы хаҡында ла тәртип буйынса...

### Машинаға ялған номерҙар ҡуйған һәм ялған номерлы автомобиль менән идара иткән өсөн ниндәй статья менән яза ҡаралған?

Бындай эштәр РФ КоАП-ының “Транспорт саралары менән уларға дәүләт теркәү номерҙарын урынлаштырыу тәртибе ҡағиҙәләрен боҙоп идара итеү” тигән 12.2 статьяһы буйынса ҡарала. Был статья дөрөҫ ҡуйылмаған номер билдәләре һәм уҡып булмай торған номер билдәләре өсөн язаны күҙаллай. Ошо уҡ статьяла ялған номер билдәләре ҡуйған, шулай уҡ шундай транспорт сараһы менән идара иткән өсөн яза сараһына ҡарала. Былары үрҙә аталған статьяның 3-сө һәм 4-се өлөштәренә ҡағыла.

### Ялған номер билдәләре (яһалма, үҙ машинаһынығы түгел) ҡуйған өсөн штраф

Шулай итеп, водителдәр тарафынан техникаларына яһалма номер билдәләрен ҡуйыу ихтималлығы булған осраҡтар байтаҡ. Хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәре проблеманы төптән тикшерә. Улар водителдең был аҙымға барып, яҡшыраҡ булыуын теләүе, ләкин, һәр ваҡыттағыса, эштең насар тамамланыуының сәбәптәре нимәлә икәнен тикшереп тормаясаҡ. Сөнки йыш ҡына ялған номер билдәләре ҡуйылған машиналар ниндәйҙер криминаль ғәмәлдәр ҡылыу өсөн файҙаланыла. Тап шуның өсөн дә тәү ҡарауға әллә ни ҙур булмаған һымаҡ тойолған был ғәмәл өсөн штраф ҙур ғына.

Үрҙә билдәләп үтеүебеҙсә, РФ КоАП-ының 12.2 статьяһы (3-4 өлөштәре) ике вариантты күҙаллай. Тәүгеһе ялған номер билдәһен ҡуйған өсөн – быныһы статьяның 3-сө өлөшө. Транспорт средствоһына күрәләтә яһалма дәүләт теркәү номерҙары урынлаштырған өсөн граждандарға – 2500 һум, транспорт средстволарын эксплуатациялау өсөн яуаплы вазифалы кешеләргә – 15 000 һумдан 20 000 һумға тиклем, юридик берәмектәргә 400 000 һумдан 500 000 һумға тиклем штраф ҡаралған.

### Яһалма номер билдәләре ҡуйылған (яһалма, ул машинаныҡы түгел) автомобилдә йөрөгән (идара иткән) өсөн штраф

Икенсе вариант – яһалма номерҙар менән йөрөгән өсөн яза. Күрәләтә яһалма дәүләт теркәү номер билдәләре ҡуйылған транспорт сараһы менән идара иткән өсөн 6 айҙан 1 йылға тиклем транспорт саралары менән идара итеүҙән мәхрүм итеү язаһы ҡаралған. Был водителдең яһалма дәүләт теркәү номер билдәләре урынлаштырылған автомобиль менән идары иткәндә тотолоуына ҡағыла.

Шуны иҫегеҙҙә тотоғоҙ, әгәр водителдең яһалма дәүләт теркәү номер билдәләрен транспорт сараһына урынлаштырыуы, унан шул яһалма номерҙар ҡуйылған автомобиль менән идара итеүе асыҡланһа, был осраҡта ҡағиҙә боҙоу ике состав буйынса квалификациялана – яһалма билдәләрҙе ҡуйған һәм шул техника менән идара иткән. Был осраҡта водителгә штраф та билдәләнә, ул водитель танытмаһынан да мәхрүм ителә.

**С. БУРАНБАЕВ,**
**ЮХХДИ инспекторы,**
**полицияның өлкән лейтенанты.**

ХӘҮЕФҺЕҘЛЕК

# Башҡортостанда йәшәүселәрҙән мутлашыусылар нисек итеп аҡса сығарттыра һәм дропперҙарға нимә янай?



Граждандарҙы кибермутлашыусыларҙың енәйәт схемаларына йәлеп итеү осраҡтары йышайҙы. Аферистар кешеләргә анһат ҡына табыш алыу мөмкинлеген тәҡдим итә. «Бының өсөн ни бары банк йәки сим-карта ғына алыу кәрәк!» - тип шылтыраталар. Был хәбәрҙәр башлыса интернетта, ҡағиҙә булараҡ, телеграм-каналдарҙа таратыла. Һуңғы осорҙа «банк картағыҙҙы, сим-картағыҙҙы бик ҡиммәткә һатып алам» тигән иғландарҙы урамдарҙа ла йыш осратырға була.

Кешеләрҙең күбеһе телефон аша мутлашыусыларҙың был карталар аша аҡса күсереүен, ә һуңынан алданған граждандар иҫәбенән урланған аҡсаларҙы ҡулаҡсаға әйләндереүенә ышанмай.

Ә хаҡ өсөн банкта иҫәп асып, картаны рәсмиләштереп һәм өсөнсө кешеләргә файҙаланыуға тапшырған йәки үҙ иҫәптәрен урланған аҡсаларҙы күсереү өсөн үҙе файҙалана икән – ул енәйәт эшмәкәрлегенә йәлеп ителгән булып сыға.

Мутлашыусыларҙың схемаларын тормошҡа ашырырға ярҙам иткәндәрҙе «дропперҙар» тип атайҙар.

Практика күрһәтеүенсә, дропперҙар ролен күбеһенсә мәктәп уҡыусылары һәм студенттар башҡара. Улар еңел табыштың ҙур финанс юғалтыуҙарға килтереүе, төрмәгә тиклем алып барып еткереүе тураһында уйламай. Шулай уҡ өлкәндәр араһында ла язаһыҙ ҡалыуға ышанғанлыҡтан, күҙен йомоп, банк картаһын, сим-картаһын һатҡан вайымһыҙҙар бар.

«Банк картаһын һәм сим-карталарҙы өсөнсө кешеләргә тапшырған өсөн карта хужалары яуаплылыҡтан азат ителмәй. Уларҙы аңлы рәүештә хаҡ өсөн башҡа кешегә тапшырыу хоҡуҡ һаҡлау органдары тарафынан енәйәти юл менән алынған аҡсаны алыуҙа ҡатнашыу йәки башҡа енәйәт итеп ҡаралыуы мөмкин. Тиҙ һәм еңел аҡса эшләү теләге енәйәт ҡылыуҙа ҡатнашыусыға, шул иҫәптән ойошторолған енәйәтселәр төркөмө составында ла, әйләндереүе бар.

Ә дроппер - ул енәйәтсел селтәрҙең түбән звеноһы, беренсе сиратта хоҡуҡ һаҡлаусылар уларҙы эҙләй», - тип билдәләй БР буйынса Эске эштәр министрлығының Енәйәтте тикшереү идаралығы бүлеге начальнигы Марат Ғөзәйеров.

Дропперҙарҙы иҫәп карталарын законһыҙ файҙаланған өсөн РФ Енәйәт кодексының 187-се статьяһы буйынса яуаплылыҡҡа тарттыралар, ул 1 миллион һумға тиклем штрафты йәки ете йылға тиклем иректән мәхрүм итеүҙе күҙ уңында тота. Шулай уҡ РФ Енәйәт кодексының 159-сы статьяһы буйынса ун йылға тиклем иректән мәхрүм итеүҙәре мөмкин. Ә РФ Гражданлыҡ кодексының 1102-се статьяһы нигеҙһеҙ эш хаҡын кире ҡайтарырға мәжбүр итә.

«Банктарға Рәсәй банкының клиент ризалығынан тыш аҡсаны күсереү тураһында мәғлүмәттәр базаһына индерелгән кешеләрҙең иҫәбе менән идара итеүгә дистанцион рөхсәтте туҡтатырға тәҡдим ителде. 2024 йылдан иһә, әгәр Рәсәй Эске эштәр министрлығынан дропперҙарҙың законһыҙ эш итеүе тураһында мәғлүмәт килә икән, банктарға мотлаҡ рәүештә дропперҙарға дистанцион банк хеҙмәтләндереүенә рөхсәт биреүҙе туҡтатыуы тураһында закон үҙ көсөнә инә», - тип аңлатма бирҙе Рәсәй банкының Башҡортостан Республикаһы буйынса Милли банк - бүлексә идарасыһы урынбаҫары Наил Ғәбиҙуллин.

Әгәр муттар йоғонтоһона эләгеп, берәй ваҡыт банк йәки сим-картағыҙҙы, банк иҫәбенә, электрон янсыҡҡа, мобиль банкка паролдәрҙе, инеү кодтарын бирһәгеҙ, был карталарҙы һәм иҫәптәрҙе тиҙ арала блокка ҡуйыу кәңәш ителә.

**Р. БАЙЫМОВ** әҙерләне.

174. Шугаринг - уверенность в себе

Поменять направление деятельности на совершенно другое и начать заняться новым делом способен не каждый. Буквально в этом году Гульнара Исянбаева решила заняться новым для себя делом - шугарингом. Прошла курсы по обучению лично у Натальи Рябиновой – гуру в сфере депиляции с 18летним опытом, и стала потихоньку принимать клиентов.

Шугаринг — удаление волос с помощью сахарной пасты. Гульнара в своем салоне предоставляет несколько услуг: шугаринг всех зон, сахарное моделирование фигуры, сахарный лифтинг лица, ультразвуковая чистка лица, ультразвуковая чистка бикини. Ввела новый вид депиляции – на фитосмоле, которая замедляет рост волос. Она работает с косметикой премиального класса ТМ RIABINOVA. Недавно Гульнара участвовала на Всероссийском чемпионате по шугарингу и заняла 1



место среди юниоров, получила звание «Королева депиляции». Эта победа дала ей еще больше уверенности в своей новой работе.

Пользуясь случаем, она приглашает Бурзянских красавиц к себе в салон, «Шугаринг это не боль и муки, а уверенность в себе. Работаю и с беременными. Придя в салон, избавитесь от вросших волос, раздражения кожи. Работаю на качество, без боли. Самое лучшее вложение - это в себя, в свою красоту, в свою гладкую кожу!» - говорит мастерица шугаринга.

В данное время Гульнара стала популярным мастером по шугарингу в нашем районе. Ее клиентки всегда присылают только слова благодарности и восхищения.

Мастер Гульнара принимает по адресу с.Старосубхангулово, ул. Салавата, 27 А (здание «Озон»). Тел. +7 986 709 18 87

ОГРН: 323028000042996

Свидетельство: 3324324550794

podpiska.pochta.ru

хикәйә

# Үс

Сәлих ВАҺАПОВ

һунарға сығыу – Файыҡтың күптәнге хыялы. Тик ҡырҡмаһа ҡырҡ сәбәп тотҡарлай ҙа ҡуя. Мылтыҡтары майлап, матурлап уралған килеш өй түбәһендә ята бирҙе. Баласағаның ҡулы етмәҫлек, кеше күҙе күрмәҫлек итеп элеп ҡуйғайны атаһы. Әйе, ауырып, һунарға йөрөй алмай башлағас: "Ваҡытың булғанда, һунарға йөрөрһөң. Минең төҫ итеп тот мылтыҡты, улым", – тигәйне атаһы.

– Файыҡ ҡустым, атайыңдың мылтығы бар ине түгелме? Айыу теңкәгә тейә бит, – тине бер көндө Әҫкәт, хәл-әхүәл һорашҡандан һуң.

Киҫә, ҡараңғы төшөр-төшмәҫтән, көтөүҙәрен айыу баҫҡан икән. Көтөүселәрҙең күҙ алдында бер һыйырҙы һуҡҡан. Аптырағас, тегеләр айыуҙы таяҡ менән һалмауырлап ҡараған. Һыйырҙар үкерешеп ҡасып бөткән. Айыу иһә теге һыйырҙы һөйрәп, үҙәккә төшөп киткән. Бер аҙҙан артынан юллап барһалар, еленен, түш майын ашап киткән, ти.

– Айыу итте еҫләндереп ашай, тип һөйләй торғайны олатайым. Табышына тағы киләсәк. Ул ҡуҡынғанды ҡарауыллап ятып ҡына атып алырға кәрәк. Барыбер тынғы бирмәҫ. Ҡустым, һин ағайыңды ҡурҡаҡ икән тип уйлама. Ҡоралһыҙ айыу тиклем айыуға нисек бармаҡ кәрәк, – тип тә өҫтәне ул.

– Атырға ярамай бит, ағай, – тине Файыҡ. – Закон ҡаты бит хәҙер.

– Закон тиген, ә, – Әҫкәт ниҙер уйлап алды. – Ҡустым, беҙ бер кемгә лә һиҙҙермәйбеҙ. Бүре лә туҡ, һарыҡ та теүәл. Тәүәккәлләйек. Мин Барый ҡоҙаның ҡушкөбәген алам. Башына етәйек шул мәлғүндең.

- Егерь һиҙеп ҡалһа... -Файыҡ икеләнде.

- Айыу ите, ҡустым, врачтар әйтмешләй – дауа. Барабыҙ и все. Өҙә генә әйт тә ҡуй.

Файыҡ атаһы менән элек айыу-бүрегә барғыланы былай. Атаһы әүәҫ һунарсы ине. Ваҡыты булдымы, әйҙә, аяҡты яҙып киләйек, тип Аҡтырнағын эйәртеп, урманға сығып ҙа китер ине. Ләкин атаһын ерләгәндән һуң һунарға сыҡҡаны булманы Файыҡтың. Ана барам, бына барам, тип, көн артынан көн үтте. Ҡара һин уны, ике йыл да булып бара түгелме? Файыҡ мылтыҡты алып төштө лә майҙан таҙартты. Патронташҡа патрон тыҡты.

Ике көндән һуң Әҫкәт менән Файыҡ урманға юлланды. Уларҙың уйынса, айыу һыйыр емтегенә ҡараңғы төшөү менән килеп етергә тейеш ине.

Ҡабаланмай ғына атлайҙар. Файыҡ Ҡашҡарын эйәртмәне. Абалап сығып, айыуҙы ҡурҡытып ебәреүе бар ине. Ҡашҡар – Аҡтырнаҡтың көсөгө. Аҡтырнаҡ һунарҙа атаһының айырылғыһыҙ юлдашы була торғайны. Ҡашҡар ҙа сос булып үҫте. Тик Файыҡ уны бәйҙә генә тота шул.

Үлгән һыйыр янына килеп еттеләр. Ағас башына менеп ҡарауылларға булдылар.



Ҡараңғылыҡ ҡуйырғандан-ҡуйырҙы. Һәр тауышҡа ҡолаҡ һалды Файыҡ. Әҫкәт эргәләге имән башында ултыра. Ул да мылтығын атырға әҙерләгән дә күҙен аҫҡа төбәгән.

Ярты төн ауышҡас, ағас араһынан бер шәүлә күренде. Ҙур – башмаҡтай бар.

Һыйыр янына килеп етте тигәндә, Әҫкәт атып ебәрҙе. Уның артынан Файыҡ та тәтегә баҫты. Айыу ҡапыл ситкә һикерҙе.

Айыу һикергән яҡҡа тағы берәр тапҡыр аттылар. Тейҙеме-юҡмы, береһе лә әйтә алмай, ләкин беренсе пуляларҙы тейеүе ихтимал ине.

Файыҡ өҫтән айыуҙы бик ентекләп ҡараны – тик күрә алманы.

– Үлдеме икән, ҡустым? Ай – һай яман һикерҙе.

Шылт иткән тауыш та юҡ. Айыу үлдеме, әллә ҡастымы – билдәһеҙ. Файыҡ йылап ҡына ағас башынан төшә башланы.

-Мин төшәм, ағай, – тине Файыҡ. – Һөжүм итә ҡалһа, ат та йыҡ.

- Көтә бирәйек, ҡустым. Бәлки, ҡасмағандыр, бер ни күренмәй бит. Файыҡтың бында таң аттырырға иҫәбе юҡ ине. Төштө лә тирә-яҡҡа ҡолаҡ һалды. Хафаланырлыҡ ул-был һиҙелмәй.

- Төш, ағай. Бөгөн эҙләп бер нәмә лә сығара алмабыҙ. Әйҙә, ҡайттыҡ.

Иртәгәһенә ҡояш менән бергә ҡуҙғалдылар. Файыҡ Ҡашҡарҙы ла эйәртте. Нисек кенә булһа ла айыуҙы атырға кәрәк. Яраланған айыуҙың хәтәр булыуын кем белмәй. Кешеләр ялалы айыуҙы күреп, кем атыуын һиҙеүҙәре лә бар. Кем атҡан – шул. Ҡайҙа рөхсәтегеҙ?

Йәйләүгә һуғылып китергә булдылар. Йәйләүҙә һауын башланғайны. Һауыу аппараты тигеҙ генә геүләй.

– Әҫкәт ағай, бөгөн тағы баҫты бит, – тине көтөүсе егет, һаулыҡ һорашҡас. – Тыу һыйырҙы һуҡҡан, ләкин ҡурҡыныс түгел. Ҡыуышты туҙҙырып киткән тайыш аяҡ. Нимәгәлер асыуланған.

Файыҡ менән Әҫкәт бер-береһенә ҡарашып алды, ләкин өндәшмәнеләр. Былай килеп сығыр тип улар уйлап та ҡарамағайны. Тимәк, айыу яралы...

Атын саптырып икенсе көтөүсе килеп етте. Оҙаҡ ҡына сапҡан булһа кәрәк, аты көскә тын ала.

- Ҡарағайлы үҙәккә тиклем юлынан барҙым. Шунда эҙен юғалттым. Атлай биргән дә ултырған, атлай биргән дә ултырған.

Урманды көнө буйы ҡыҙырһалар ҙа, айыуҙы таба алманылар. Әйтерһең, һыуға төшөп юҡ булды. Яралы йыртҡыс тураһындағы хәбәр тирә-яҡҡа таралды. Бала-саға, бисәсәсә урман-ҡырҙарға яңғыҙ йөрөмәҫ булды. Шомло хәбәр район үҙәгенә лә барып еткән: биш кешенән торған команда килеп төштө. Улар айыуҙы кем атыуын асыҡларға тырышты, ләкин бушҡа ғына. Ул да булманы, күрше ауылдың көтөүен айыу баҫҡан тигән хәбәр таралды. Бер үк айыуҙың эше ине булһа кәрәк был. Егерҙар өҫ көн буйы урманды айҡаны, ләкин айыуҙың эҙенә төшә алманы. Әҫкәт менән Файыҡ та буш ваҡыттарында, ярҙам итәбеҙ, тигән булып, айыуҙы эҙләште. Бер көндө айыу Файыҡтың ҡураһына төшөп, малын баҫты. Әҫкәт ҡурҡыуға төштө. "Доньяны ҡоротасаҡ бит былай булғас. Бөгөн – Файыҡтың малын... Иртәгә минекен ҡырып бөтөүен көт тә тор. Үс ала, яуыҙ. Ҡотолоп ҡына буламы... Файыҡ менән икебеҙҙе эҙләй... Файыҡты ниңә ҡоторторға инде? Кәбәк баш, – тип әрләне ул үҙен. – Ҡартайғансы аҡыл инмәүе шул инде".

Егерҙәр башлығы Иван Иваныч менән ветврач Файыҡтың ҡураһын килеп ҡараны.
- Айыуҙың эше, – тине эшлекле ҡиәфәт менән Иван Иваныч. – Яралы, шуға ярһыу.
- Кешеләргә лә һөжүм итеүе мөмкинме? – тип һораны Әҫкәт.
- Ундай хәлдең булғаны бар, – тине Иван Иваныч. – Беҙ уны ситтән эҙләйбеҙ, ул ауыл тирәһендә булырға тейеш.

Ауыл халҡы менән ауыл тирәһендәге әрәмәлектәрҙе, урманды һөҙөп сығыу ҙа һөҙөмтә бирмәне. Әҫкәттең былай ҙа ҡара йөҙө тағы ла ҡара янып китте. Күҙе эскә батты, ябыға төштө. Күрше ауылға барып, бер эт алып ҡайтты. Алып ҡайтты ла ҡураһына бәйләп ҡуйҙы: хәҙер килеп ҡараһын теге мөртәт. Бер көндө Файыҡ менән Әҫкәт тағы урманға юлланды. Файыҡ Ҡашҡарын да эйәртте. Егерҙар хәҙер ауылға ҡайтмай, урманда ҡунып йөрөйҙәр ине. Файыҡтар егерҙар ҡыуышына һуғылырға булды. Ҡыуышҡа етәрәк тәрән, ҡуйы урман менән ҡапланған үҙәккә килеп сыҡтылар.
-Ағай, мин үҙәккә төшәм, әһин һырттан бар, – тине Файыҡ, – бик шомло үҙәккә оҡшай.
Әҫкәт:
- Ҡуй, ҡустым, айыу килеп сыҡһа, мин ни эшләрмен! Йәнлектәрҙе беләм мин, улар һыртҡа ҡарай ҡаса бит, – тип ризалашманы.
-Улайһа, һин үҙәккә төш, ағай. Ләкин Әҫкәттең үҙәккә төшкөһө килмәне.
- Улай булһа, Ҡашҡар һинең менән булһын. – Файыҡ уға Ҡашҡарҙы баулап бирҙе. Шунда ғына Әҫкәттең эсенә йылы керҙе.
-Бынһы, ҡустым, икенсе эш. Файыҡ үҙәккә төшөп китте, Әҫкәт тә һырт буйлап алға ҡуҙғалды. Әҫкәт мылтыҡ тауышына тертләп туҡтаны. Шунда уҡ Файыҡтың үҙәк өҙгөс тауышы ишетелде.
– А-а-а! Әҫкәт!..

Ҡашҡар Әҫкәтте тау аҫтына ҡарай һөйрәне. Бара биргәс, ул Ҡашҡарҙы ысҡындырҙы ла эт артынан йән-фарман йүгерҙе. Бер аҙҙан эт ағастар араһына инеп юғалды. Әҫкәт барып еткәндә, Ҡашҡар менән айыу араһында ҡаты алыш бара ине. Бер яҡ ситтә Файыҡ ҡанға туҙып ята. Ҡатты ла ҡалды Әҫкәт. Ҡашҡар менән айыу араһында алыш ҡыҙҙырғандан-ҡыҙҙы. Айыу Ҡашҡарҙы тота алмай, тота ҡалһа... Әҫкәтте ҡурҡыу солғап алғайны. Үҙе лә һиҙмәҫтән, ул ҡапыл ғына кире боролдо ла бар көсөнә артҡа һыпыртты. "Ҡасырға... ҡасырға... Хәҙер ботарлай әтеү..." Егерҙәр Файыҡты иҫһеҙ ятҡан еренән табып алды. Янында Ҡашҡар ҙа, айыу ҙа юҡ ине. Файыҡтың яраһын бәйләнеләр.
- Ничего, брат, туйға тиклем уңалыр, – тип уны күтәреп алдылар ҙа ауылға ҡарай ыңғайландылар.
- Әҫкәткә ни булды? Эһ-эһ...
- Әҫкәт юҡ таһа, брат?!

Әҫкәт менән Ҡашҡар киҫкә тиклем табылманы. Төнгә ҡарай ғына Әҫкәттең ауылда булыуы асыҡланды. Файыҡты ул күрмәгән дә, ишетмәгән дә. Урманда йөрөгән-йөрөгән дә эңерҙә генә арманһыҙ булып ҡайтҡан, йәнәһе. Ә Ҡашҡар бер ҡуянды ҡыуып киткән дә ҡабат урап килмәгән. Шул уҡ көндө Файыҡты больницаға оҙаттылар. Өс ҡабырғаһы һынған, тән яраһы алған. Айыуҙы һыйырҙың һөйәктәрен өйөп йөрөгән сағында атып алдылар.
- Ярай әле, һөйәкте өйөп өлгөрмәне, өлгөрһә, был тирәнән тайыр ине, – тине Иван Иваныч белдекле төҫ менән.

...Ҡашҡар аҙна тигәндә генә ҡайтып инә. Ишек алдында ниҙер эшләп йөрөгән Әҫкәтте күреүе була, уға ташлана. -Пшел! Пшел! Ҡашҡар! А-а-а!..

Ҡашҡарҙың күҙе тонғайны, ул тағы ла нығыраҡ ҡаныҡты.
- Ыр-ыр-ыр!
- Ҡашҡар, пшел!

Ләкин Ҡашҡар Әҫкәтте талауын, абалауын белде. Әҫкәттең салбар балағы йыртылып китте.
- Ҡарауыл! Ҡотҡарығыҙ! Үлтерә-ә-ә!

Тауышҡа күршеһе Булат йүгереп килеп етте. Эште аңлап алды ла, күҫәк әләктереп, Ҡашҡарға ынтылды.
– Ыр-р-р!

Ул йүгереп килеп Ҡашҡарҙың арҡаһына һуҡты. Эт сыйылдап ебәрҙе һәм тештәрен Әҫкәттең итегенән ысҡындырҙы.
- Һуҡ, Булат, башына ҡундыр!
Булат киҙәнеп тағы бер һуҡты. Ҡашҡар бер аҙ бөгәлеп барҙы ла әкрен генә ергә ятты.
- Тағы берҙе һуҡ! Билләһи ҡоторған, – тине Әҫкәт, сак-сак тын алып. Булат тағы берҙе һуҡты. Ҡашҡар шунда йән бирҙе.
- Яҡшынан яман тыуған тигәндәре ошо буламы икән әллә? Әсәһенән аҡыллы эт юҡ ине лә баһа, – тип хайран ҡалды Булат.

Кешенең генә түгел, хайуандың да хыянатты ғәфү итә алмауын Әҫкәт әллә төшөндө, әллә юҡ...


Фото: Олег Яровиков

# Радий Хәбировтың бишйыллығының төп йомғаҡтары

***Биш йыл элек, 2018 йылдың октябрендә, Радий Хәбиров Башҡортостан Башлығы булды. Төбәк етәксеһе эш башлауының тәүге айында уҡ бер нисә тапҡыр республика халҡының үҙ мөмкинлектәрен баһалап бөтмәүе һәм бергәләп тағы ла яҡшыраҡ һөҙөмтәләргә өлгәшеп булыуы тураһында әйтте. Шул ваҡыттан алып бөгөнгәсә ниндәй башланғыстар тормошҡа ашырылды? Беҙ 30-ҙан ашыу яңылыҡты тупланыҡ.***

***«Был йылдар минең тормошомда иң бәхетлеһе булды, сөнки республика өсөн еңел булмаған ошо ваҡытта мин халҡым менән бергә булдым. Үҙемдең бөтә көсөмдө һәм энергиямды тыуған Башҡортостанымды Рәсәйҙең алдынғы, ныҡлы һәм сәскә атыусы төбәктәренең береһе итеү өсөн һалдым».***

***Радий Хәбиров үҙенең бишйыллығының һөҙөмтәләре тураһында.***

## МӘКТӘПТӘРҘЕ РЕМОНТЛАУҒА 8,6 МИЛЛИАРД ҺУМ

Тарихта тәүге тапҡыр мәктәптәрҙе ремонтлауға миллиондарса түгел, ә миллиардтарса һум бүленә. Һуңғы ике йылда Башҡортостанда 37,6 мең балаға иҫәпләнгән 140 мәктәп бинаһы ремонтланған, был маҡсатҡа 8,6 миллиард һум бүленгән. Бығаса мәктәптәрҙе ремонтлауға йылына 600 миллион һум йүнәлтелә ине, был 40-50 бинаның иң проблемалы урындарын өлөшләтә ремонтлауға етеп торҙо. 30 йыл эсендә тәүге тапҡыр колледждарға капиталь ремонт яңала башланы: ике йыл рәттән ошо маҡсатта 500-әр миллион һум бүленә.

## ТАЛАНТЛЫ УҠЫТЫУСЫЛАРҒА ҺӘМ УҠЫУСЫЛАРҒА АҠСА БИРӘЛӘР

Башҡортостанда тәүге тапҡыр һәләтле уҡытыусылар һәм уҡыусылар өсөн гранттар булдырылды. Ауыл ерендә эшләгән йәш уҡытыусылар – 690-шар мең, иң яҡшы балалар баҡсалары педагогтары – 575-әр мең һум премия, колледждың һәләтле студенттары 5000-шәр һум стипендия ала. Бөтә Рәсәй олимпиадалары һәм конкурстарында еңеү яулаған уҡыусылар, шулай уҡ уларҙы әҙерләгән педагогтар 100 мең һумға тиклем аҡсалата бүләк ала, ә БДИ-ны 100 балға тапшырған һәм Башҡортостан вуздарында уҡырға ингән сығарылыш уҡыусылары бер тапҡыр бирелә торған 150 мең һум күләмендәге премия ала.

## ПЕНСИОНЕРҘАР БУШЛАЙ СӘЙӘХӘТ ИТӘ

Ил күләмендә үҙенсәлекле һаналған "Башҡортостанда оҙон ғүмерлелек. Туризм" проекты булдырылды. Ул өлкән быуын вәкилдәренә (55+) Башҡортостандың матур урындары буйлап бушлай сәйәхәт итеү мөмкинлеге бирҙе. Унда 30 мең кеше ҡатнашты ла инде. 2023 йылда уның географияһы Беларусь менән Абхазияға киңәйтелде.

## ҒАЛИМДАРҒА – ФАТИР

Фәнгә аҡса бүлә башланылар! 2022 йылдан йәш ғалимдар һәм уҡытыусылар торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға һәм илдең төп университеттарында бушлай стажировка үтеүгә миллион һум күләмендә гранттар ала.

## АУЫЛ ТРЕНЕРҘАРЫНА – БЕР МИЛЛИОН ҺУМ

Ауылда ла спорт секциялары эшләһен өсөн 2020 йылда "Ауыл тренеры" проекты старт алды. Ауылға күсеп килгән белгестәр берешәр миллион һум ала.

## РЕКОРДЛЫ УҢЫШ

2022 йылда аграрийҙар һуңғы 30 йылда булмағанса рекордлы иген культуралары уңышы йыйып алды – 5 миллион тоннанан ашыу. Был ҡаҙаныш – фермерҙарға ярҙам итеү һәм ташландыҡ ерҙәрҙе әйләнешкә кире ҡайтарыу буйынса ҙур эш һөҙөмтәһе.

## БАҠСАСЫЛАР МӘНФӘҒӘТЕНӘ АҠСА

Һуңғы 50 йылда тәүге тапҡыр республика баҡсасылар проблемаларын хәл итә башланы. Баҡсасылыҡ ширкәттәренә юлдар һалына, электр һәм һыу мәсьәләләре хәл ителә. Иң яҡшы ширкәттәр төҙөкләндереүгә гранттар ала.

## БУШЛАЙ ҺӨТ

2019 йылда совет заманынан алып тәүге тапҡыр "һөт кухняһы" эшләй башланы. Ул мохтаж граждандарҙы һәм буласаҡ әсәләрҙе бушлай һөт ризыҡтары һәм ҡоро һөт ҡатнашмалары менән тәьмин итә.

## ЯНҒЫН ТУРАҺЫНДА ИҪКӘРТЕҮСЕ БУШЛАЙ ҠОРАМАЛДАР

Кешеләр ғүмерен һаҡлау өсөн янғын тураһында иҫкәртеүсе ҡорамалдар бушлай таратыла. Тәүҙә улар ике төрлө категорияға ҡараған граждандарға бирелде, хәҙер инде – 14! Һуңғы биш йылда йорттарға 500 меңгә яҡын янғын иҫкәрткес ҡуйылған, был 978 кешенең, шул иҫәптән 355 баланың ғүмерен ҡотҡарырға мөмкинлек биргән.

## МАТУР ҠАЛАЛАР, ИХАТАЛАР ҺӘМ ПОДЪЕЗДАР

Тәүге тапҡыр йәмәғәт урындарын төҙөкләндереү буйынса эш, урындағы хакимиәттәр көсө менән генә түгел, ә миллиард һумлыҡ гранттар йәлеп итеп, комплекслы рәүештә башҡарыла башланы. 2019 йылдан алып йөҙәрләгән парк, сквер, яр буйы төҙөкләндерелде. Тәүге тапҡыр ихаталарҙы һәм подъездарҙы комплекслы ремонтлау буйынса программалар эшләй башланы. Биш йыл эсендә меңдән ашыу ихата һәм подъезд тәртипкә килтерелгән

## ЮЛДАР РӘТЛӘНӘ

Райондарға тәүге тапҡыр ауылдарға илткән юлдарға ҡырсынташ түшәү өсөн аҡса бүленә башланы. 2023 йылда ғына ошо маҡсатҡа 500 миллион һумдан ашыу аҡса йүнәлтелгән. Бөтәһе ике мең километрҙан ашыу юл япмаһы рәтләнгән.

## ФАП-ТАР ҺӘМ ДАУАХАНАЛАР ТӨҘӨЛӘ

Коронавирус пандемияһына ҡарамаҫтан, 2022 йыл йомғаҡтары буйынса ғүмер оҙонлоғо тарихта тәүге тапҡыр 73 йәштән уҙҙы. Һуңғы биш йыллыҡта Башҡортостанда 14 ҙур дауахана һәм поликлиника, дүрт инфекция госпитале, 333 фельдшер-акушерлыҡ пункты һәм ауыл амбулаторияһы төҙөлгән.

## ЯЛҒАН АЛКОГОЛГӘ ҠАРШЫ КӨРӘШ

Хәбиров килеү менән республикала ялған алкоголь етештереүселәргә һәм һатыусыларға ҡаршы әүҙем көрәш башланды. 2022 йылда Башҡортостан алкоголдән ағыуланып үлеү буйынса минималь күрһәткескә өлгәште – 52 осраҡ. Был күп, әммә бынан ун йыл элек ялған алкоголдән йыл һайын ике-өс йөҙләгән кеше үлә ине.

**БЕЛГЕСТӘР НИМӘ ТИ?**
**Федераль һәм урындағы эксперттар РБК-Өфөгә республиканың һуңғы биш йылдағы ҡаҙаныштарын атаған. Иң ҡыҙыҡлы, тос фекерҙәрҙе тәҡдим итәбеҙ.**

*«Хәбиров күп кенә киҫкен, ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итте, шул уҡ ваҡытта халыҡтың да, федераль властың да ихтирамын һаҡлап ҡалды».* **Дмитрий Журавлев,** Төбәк проблемалары институты етәксеһе.

*«Хәбиров командаһына коронавирус пандемияһына, МХО-ға, Көнбайыштың санкцияларына бәйле саҡырыуҙар менән осрашырға тура килде. Асылда ошо ваҡыт эсендә идара итеү системаһы көсөргәнешле режимда эшләне һәм төбәктә тотороҡло социаль-иҡтисади торошто һаҡлап, иҡтисади бурыстарҙы үтәне».* **Николай Евдокимов,** сәйәси фәндәр кандидаты.

*«Төбәк властының механизация һәм малсылыҡты үҫтереүгә баҫым яһауы – дөрөҫ йүнәлеш. Техника паркының артыуы – заман талабы. Производствоны автоматлаштырмайынса, көнәркәшлеккә өлгәшеп булмай».* **Леонид Холод,** иҡтисад фәндәре докторы, Рәсәй ауыл хужалығы һәм аҙыҡ-түлек министрының элекке урынбаҫары.

*«Төбәктең идеаль башлығы кем ул? Ул биләмәнең мәнфәғәттәрен яҡлаусы һәм лоббист, уның үҫеш драйверы. Хәбиров лоббист булараҡ та, драйвер булараҡ та үҙен танытa алды, тип уйлайым».* **Константин Калачев,** политолог.

Материалдар Башҡортостан Республикаһының «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто дәүләт унитар предприятиеһы редакцияһы тарафынан әҙерләнде. Мәҡәләләр буйынса тәҡдимдәрегеҙҙе axmelshina.v@rbsmi.ru адресы йәки (347) 272-92-61 телефоны аша еткерә алаһығыҙ.

podpiska.pochta.ru




622. Брәтәк ауылында йәшәүсе ғәзиздәрҙән-ғәзиз кешебеҙ - ҡатыным, әсәйебеҙ, ҡәйнәбеҙ, өләсәйебеҙ **Йәғәфәрова Хәмдиә Һаҙый ҡыҙы** 15 октябрҙә күркәм ғүмер байрамын - 60 йәшлек юбилейын билдәләй. Ҡәҙерлебеҙҙе ошо айҡанлы



ихлас ҡотлап, йөрәк түрәнән сыҡҡан изге теләктәрҙе юллайбыҙ: һаулыҡтың иң ныҡлыһын, бәхеттең иң ҙурын, ғүмерҙең иң оҙонон теләйбеҙ. Иртәләрең - ҡояшлы, көндәрең көләс, кистәрең айлы, уйҙарың яҡты, күңелең тыныс булһын. Йөҙөңдән бер ваҡытта ла нур, йылмайыу китмәһен. Һин беҙҙең өсөн терәк тә, кәңәшсе лә, йөрәк йылыһын тигеҙ өләшеүсе изге йән дә.

**Йәшәү шатлығы һин**
**беҙҙең өсөн,**
**Үтер юлыбыҙға үрнәк һин.**
**Сабырһың да, оло йәнлеһең дә,**
**Беҙҙең өсөн һәр саҡ кәрәк һин.**
**Рәхмәт, әсәй, барыһы өсөн дә,**
**Беҙ бәхетле һинең янында.**
**Йәшә мәңге ҡәҙер-хөрмәттә,**
**Тормош йәмле тик**
**һин булғанға!**

Иң изге теләктәр менән тормош иптәшең Ринат, ҡыҙҙарың Гүзәлиә, Айһылыу, кейәүҙәрең Марсель, Руслан, улың Динар, киленең Нурзилә һәм ейән-ейәнсәрҙәрең.

* * *

621. Иҫке Монасип ауылында йәшәүсе ҡәҙерле ағайыбыҙ, апабыҙ **Буранов Фәнил Мөжәһитдин улы** 60 йәшлек оло юбилейын билдәләй. Уны ошо күркәм байрамы менән ҡотлап, иң



изге, иң яҡты теләктәребеҙҙе еткерәбеҙ. Ныҡлы һаулыҡ, оҙон ғүмер, именлек, күңел тыныслығы, ҡәҙер-хөрмәттә тә бәхетле ғүмер кисереүен теләйбеҙ. Гел шулай бөгөнгөләй тормош матурлығына ҡыуанып, йөҙөңдәге алсаҡлығыңды юғалтмай, күңелеңдәге ихласлыҡты һаҡлап йәшә. Яҡындарыңа өләшкән йөрәк йылың, иғтибарың үҙеңә лә изгелектәр булып ҡайтһын. Ғүмереңә - бәрәкәт, ҡот-ырыҫ, изге йөрәгеңә - көс, йәшәү дәрте бирһен, сәләмәтлектән айырмаһын һине Аллаһы Тәғәлә.

**Ҡыуаныстар шишмә**
**булып аҡһын,**
**Күтәренке булһын күңелең.**
**Именлектә, беҙҙең**
**менән бергә**
**Үтһен гөрләп һинең ғүмерең.**

Иң изге теләктәр менән һеңлең Флүрә, кейәүең Рәүф, улдарың Зәйтүн, Рәдиф, Байрас, килендәрең Нәйлә, Гөлзирә һәм дә балалар.

* * *

628. Әбделмәмбәт ауылында йәшәүсе ҡәҙерлеләребеҙҙең - атайым **Заһитов Әмин Фаяз улының** 60 йәшлек юбилейы һәм әсәйем **Заһитова Нәфисә Хәйбулла ҡыҙының** тыуған көнө. Ошо матур байрамдары менән ғәзиздәребеҙҙе ҡайнар ҡотлайбыҙ! Һеҙ беҙҙең оло ҡыуанысыбыҙ, терәгебеҙ, таянысыбыҙ. Киләсәктә һеҙгә ныҡлы һаулыҡ, именлек, оҙон ғүмер, бәрәкәтле мул тормош теләйбеҙ. Ауырымай-һыҙланмай, беҙгә терәк-таяныс булып, балаларығыҙҙың, ейән-ейәнсәрҙәрегеҙҙең изгелектәрен күреп, ҡәҙер-хөрмәттә бәхетле ғүмер кисерергә насип булһын һеҙгә!

**Сәләмәтлек ташламаһын һеҙҙе,**
**Һәр тыуған көн**
**үтһен шатлыҡта.**
**Йәшәү йәме, донъя именлеге**
**Юлдаш булһын**
**һеҙгә тормошта.**

Ҡотлау менән ҡыҙҙары Нәзифә, кейәүе Айбулат, улдары Әлим, Әлфир, килене Гөлмира, ейән-ейәнсәрҙәре Ынйы, Аяз, Нияз, Ләйлә.

* * *

620. Байназар ауылында йәшәүсе әсәйебеҙ, ҡәйнәбеҙ, өләсәйебеҙ **Ишбулатова Рима Дамулла ҡыҙын** 55 йәшлек күркәм юбилейы менән ихлас күңелдән ҡайнар ҡотлайбыҙ. Ҡәҙерлебеҙ, киләсәк көндәрең өмөт менән



тулы булып, ғүмер йомғағың шатлыҡ-һөйөнөстәргә генә тулып тәгәрәһен. Тормош ауырлыҡтарына бирешмәй, сабыр булып, һәр атҡан таңға, яуған ҡарҙарға, килгән яҙҙарға, аҡҡан һыуҙарға һоҡланып, үткән ғүмергә үкенмәй, балаларыңдың изгелеген күреп, әлегеләй изге күңелле, алсаҡ йөҙлө булып оҙон-оҙаҡ бәхетле ғүмер кисерергә яҙһын һиңә. Һин булғанға донъябыҙ йәмле, йәнле, һинең фатихаң менән аҙымдарыбыҙ ышаныслы, бәхетебеҙ тулы, уйҙарыбыҙ яҡты. Хоҙай үҙеңде сәләмәтлектән, бәхеттән, күңел тыныслығынан айырмаһын!

**Рәхмәт һиңә, мең-мең рәхмәт,**
**Бар нәмәгә булдың түҙемле.**
**Сәләмәт бул, ҡайғылар**
**һис күрмә,**
**Хоҙай ололаһын үҙеңде.**
**Беҙҙең өсөн мәңге ҡәҙерле һин,**
**Хоҙай ҡушһын бергә йәшәргә.**
**Ер йөҙөндә күпме кеше йәшәй,**
**Иң яҡыны беҙгә һин генә.**
**Ҡыуаныстар шишмә**
**булып аҡһын,**
**Күтәренке булһын күңелең.**
**Именлектә, беҙҙең менән бергә**
**Үтһен гөрләп һинең ғүмерең.**

Ҡотлау менән ҡыҙҙарың Миләүшә һәм Роза, улың Батыр, кейәүҙәрең Винер һәм Айтуған, ейәндәрең Айнур һәм Инсаф, ейәнсәрең Алина.

* * *

626. Байназар ауылында йәшәүсе ҡәҙерле һеңлебеҙ **Ишбулатова Рима Дамулла ҡыҙын** 55 йәшлек матур ғүмер байрамы менән ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ.



Бар яҡтан да уңған һеңлебеҙ, һинеҙ ҡотон һаҡлап, балалары менән матур ғүмер кисерә. Хоҙай Тәғәлә уға бөтә матурлыҡты бүләк иткән. Туған йәнле, ярҙамсыл, оста ҡуллы, уңған, егәрле хужабикә булыуында, үҙ эшен яратып эшләүендә уның матурлығы.

Ҡәҙерле Римма һеңлебеҙгә ныҡлы һаулыҡ, бәхетле оҙон ғүмер, эшендә уңыштар теләйбеҙ, балаларының изгелектәрен күреп, оҙон-оҙаҡ йәшәргә Хоҙай насип итһен.

Бөгөнгөләй тормош матурлығына ҡыуанып, нурлы йөҙөңдөң алсаҡлығын юғалтмай, эшеңдән йәм табып, шатлыҡ-ҡыуаныста ғына ғүмер итергә яҙһын. Тыуған көнөң ҡотло булһын!

**Ҡотло булһын матур юбилейың,**
**Бәхеттәрең килһен үрелеп.**
**Ҡыуаныстар ғына**
**юлдаш булһын,**
**Йәшә шатлыҡтарға төрөнөп!**

Һине яратып, ҡотлау менән Ишморатовтар, Аҫылбаевтар, Ҡолдәүләтовтар, Муллагилдиндар, Баязитовтар, Сабитовтар ғаиләләре.

* * *

627. Тәбиғәттең бик матур миҙгелендә Бөрйән районының Ҡолғана ауылында донъяға килгән игеҙәктәр **Сәғит һәм**



**Фәрит Яҡуповтарға** 55 йәш тула. Уларҙы ошо матур юбилейҙары менән ҡотлап, йөрәк түренән сыҡҡан иң изге теләктәребеҙҙе еткерәбеҙ.

Ғүмерҙең иң оҙонон, бәхеттең мөлдөрәмә тулыһын, һаулыҡтың иң ныҡлыһын, яҡты ал таңдар, зәңгәр аяҙ күк теләйбеҙ. Киләсәк көндәрегеҙ өмөт менән тулы булһын, ғүмер йомғағығыҙ шатлыҡ-һөйөнөстәргә генә тулып тәгәрәһен. Тормош ауырлыҡтарына бирешмәй, сабыр булып, һәр атҡан таңға, яуған ҡарҙарға, килгән яҙҙарға һоҡланып, үткән ғүмергә үкенмәй, балаларығыҙҙың изгелектәрен күреп, бәхетле ғүмер кисерергә яҙһын.

Ҡотлау менән Ҡәмәр, Венер, Азалия Яҡуповтар

* * *

623. Ғәҙелгәрәй ауылында йәшәүсе беҙҙең ҡәҙерлебеҙ - улым, тормош иптәшем, ағайыбыҙ, ҡустыбыҙ, ҡәйнешебеҙ, ҡайнағабыҙ **Сафин Дамир Әхәт улы** күркәм юбилейын билдәләй.



Уны алтын юбилейы - 50 йәше менән ҡайнар ҡотлап, иң изге теләктәребеҙҙе еткерәбеҙ! Алдағы тормошоңда ҡоростай ныҡлы һаулыҡ, оҙон ғүмер, ғаилә бәхете, аяҙ күк йөҙө теләйбеҙ.

**Оҙон булһын һинең ғүмерең,**
**Тыныс булһын һәр саҡ күңелең.**
**Бәхет шишмәләрең мул аҡһын,**
**Ҙур шатлыҡтар менән**
**таң атһын.**
**Һәр яңы көн бәхет**
**алып килһен,**
**Алһыу таңдар**
**күмһен шатлыҡҡа.**
**Йәшәү дәрте янһын йөрәгеңдә,**
**Ҡартайырға һис тә ашыҡма.**

Иң изге теләктәр менән атайың, улың, тормош иптәшең, апайҙарың, әҙнәләрең, һеңлеләрең, кейәүҙәрең, ағайҙарың, еңгәләрең һәм уларҙың балалары.

* * *

629. Килдеғол ауылында йәшәүсе улыбыҙ, ағайыбыҙ **Исҡужин Вадим Кәрим улын** 35 йәшлек юбилейы менән ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ!

Ҡәҙерлебеҙгә йөрәк түребеҙҙә һаҡланған иң матур, иң изге теләк-тәребеҙҙе юллайбыҙ. Бәрәкәтле оҙон ғүмер, иҫәнлек-һаулыҡ, шатлыҡ-ҡыуаныстар,



аҡ бәхеттәр, эшеңдә уңыштар теләйбеҙ. Беҙ һәр саҡ һинең уңған һәм ихлас, ярҙамсыл, кешелекле булыуыңа һоҡланабыҙ. Килер көндәрең аяҙ, тыуыр таңдарың тыныс булһын. Лилиә киленебеҙ менән артабан да балаларығыҙға өлгөлө тәрбиә бирөп, ауырлыҡтарға баш эймәй, ҡуйған маҡсаттарығыҙға ирешеп, матур тормошта ғүмер итергә насип булһын.

**Теләктәрҙең теләйбеҙ**
**иң изгеһен,**
**Шатлыҡтарҙың теләйбеҙ**
**иң ҙурын.**
**Бәхеттәрҙең теләйбеҙ,**
**ҡояш кеүек,**
**Мәңге һүнмәй**
**торған нурлыһын!**

Ҡотлау менән атайың, әсәйең, ҡустың Илназ, һеңлең Наҙгөл.

* * *

624. Килдеғол ауылында йәшәүсе ағайымды, ҡайнағамды, апабыҙҙы - **Исҡужин Вадим Кәрим улын** 35 йәшлек матур юбилейы менән ҡайнар ҡотлайбыҙ.



Һиңә ғүмерҙең иң оҙонон, һаулыҡтың иң ныҡлыһын, бәхеттең иң ҙурын, шатлыҡтарҙың иң мулын теләйбеҙ. Лилиә еңгәй менән матур, тигеҙ ғүмер итеп, балаларығыҙҙы бергә-бергә үҫтереп, уларҙың шатлыҡ-һөйөнөстәренә ҡыуанып оҙаҡ йылдар муллыҡ-бәрәкәттә йәшәргә яҙһын. Хоҙай һине сәләмәтлектән айырмаһын. Беҙ һеҙҙе яратабыҙ!

**Тормош юлың һинең**
**балҡып торһон,**
**Яғымлы, шат булһын күңелең.**
**Оҙон ғүмер,**
**бәхет-шатлыҡ менән**
**Бер ҡайғыһыҙ үтһен ғүмерең.**

Ҡотлау менән һеңлең Гөлфинә, кейәүең Инсаф һәм балалар.


Директор-баш мөхәррир вазифаһын башҡарыусы
Р. Ш. БАЙЫМОВ.

**Гәзитте ойоштороусылар:**
Башҡортостан Республикаһының Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы, Башҡортостан Республикаһының «Республика Башҡортостан» Нәшриәт Йорто дәүләт унитар предприятиеһы.

**Нәшер итеүсе, мөхәрририәт адресы:**
**450079. Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13.**
**453580. Башҡортостан Республикаһы, Бөрйән районы, Иҫке Собханғол ауылы, Ленин урамы, 98.**



Редакцияға килгән ҡулъяҙмаларға баһа бирелмәй, кире ҡайтарылмай. Автор фекере редакцияныҡы менән тап килмәүе мөмкин. Мәҡәләләрҙә килтерелгән факттарҙың дөрөҫлөгө өсөн автор үҙе яуаплы. Реклама, белдереү, иғландарҙың дөрөҫлөгө өсөн редакция яуап бирмәй.

**Телефондар:**
Директор-баш мөхәррир - **3-62-62,** мөхәррир урынбаҫары-яуаплы секретарь - **3-62-92**, бухгалтерия, хаттар бүлеге - **3-52-85**.

**Беҙҙең банк иҫәбе:**
ИНН 0274062111, р/с 40602810200190000003
Дополнительный офис «Отделение в г. Белорецк» Филиала ПАО «БАНК УРАЛСИБ» в г. Уфа.
Ҡотлау, белдереү өсөн аҡсаны почта аша ебәрергә.

Гәзит редакцияның компьютер үҙәгендә әҙерләнде һәм Белорет мәғлүмәт үҙәге - Башҡортостан Республикаһының «Республика Башҡортостан» Нәшриәт Йорто дәүләт унитар предприятиеһы филиалы типографияһында баҫылды (453500, Башҡортостан Республикаһы, Белорет ҡалаһы, Октябрҙең 50-йыллығы урамы, 55/1. Тел.: 3-07-97). Заказ № 2418. Дөйөм тиражы: 1391 дана. Баҫма версия - 1095+269. Электрон версия - 27. Хаҡы ирекле.

Индексы - ПО 718

Гәзит Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм киң коммуникациялар өлкәһендә күҙәтеү буйынса Федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығында теркәлде. Теркәү номеры ПИ № ТУ02-01439. 01.09.2015 йыл.

Гәзит башҡорт телендә аҙнаһына бер тапҡыр - йома көнөндә сыға.

Ҡул ҡуйыу ваҡыты 12.00 сәғәттә.
Ҡул ҡуйылды 19.10.23.
12.00 сәғәттә.


podpiska.pochta.ru